*Кешелек - үҙенә күрә бер ағас ул. Милләттәр - уның ботаҡтары. Көслө елгә оҡшаш ваҡиғалар, ғәҙәттә, ошо "ботаҡтарҙы" бер-береһе менән бәрелештерә, һуғыштыра. Һөҙөмтәлә ағас зыян күрә. Күрәһең, "Ниндәй генә игелекһеҙ эш эшләһәң дә, бының менән үҙеңә генә зыян килтерәһең" тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһе лә ошондалыр.*

*Фәтхулла ГӨЛӨН, төрөк шағиры һәм мәғрифәтсеһе.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30 ҒИНУАР - 5 ФЕВРАЛЬ (ҺЫУЫҒАЙ - ШАҠАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №5 (371)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Беҙҙең һүҙҙән...**

бала һығымта яһай



6

**Мәғәфүр Хисмәтуллинды**

иҫкә алып...



10

**Насар ғәҙәттәрең бармы?**





12 Спорт менән дуҫлаш!

**Ирҙәр зауығы...**

аяҡ кейемендә нығырақ сағыла



13

14 ТВ-программа


МОНОЛОГ

# БЕҘ – БӘЙҒӘМБӘРЛЕ МИЛЛӘТ,

## шуға үҙ бәҫебеҙҙе үҙебеҙ белеү фарыз...



**Хеҙмәттәшебеҙ, яҙыусы, журналист, Башҡортостан һәм Рәсәй Яҙыусылар, Журналистар союздары, Әҙәбиәт фондтары ағзаһы, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты, ике проза, өс шиғыр йыйынтығы һәм ике публицистик китап авторы Әхмәр Үтәбайға 50 йәш. Әхмәр Ғүмәр улы беҙҙең гәзиткә төрлө урындарҙа эшләп, апаруҡ ҡына тормош һәм ижад тәжрибәһе туплап килде. Шуға күрә яңы баҫманың бер ниндәй ҙә гәзит-журналға оҡшамаған үҙ концепцияһын формалаштырыуҙа уның да индергән өлөшө ҙур булды. Күптәр Әхмәрҙе тормош, донъя, милләт яҙмышы, тарих хаҡында фәлсәфәүи юҫыҡта фекер йөрөтөүсе ижадсы итеп белә. Әммә уның менән яҡындан аралашҡандар һәр нәмәнән көлкө, юмор таба белеүсе иҫ киткес әүҙем әңгәмәсе, сурытыусы булыуына ла шаһит. Ҡыҫҡаһы, һүҙҙе оҙонға һуҙмайынса, хеҙмәттәшебеҙҙе "Киске Өфө"ләр һәм бөтөн уҡыусыларыбыҙ исеменән күркәм юбилейы менән ҡотлайбыҙ, иң изге теләктәребеҙҙе юллайбыҙ һәм әңгәмә ебен Әхмәр Үтәбайҙың үҙенең ҡулына тотторабыҙ. Был юлы ул беҙгә һуңғы ваҡыттағы төрлө юҫыҡта уйланыуҙарынан өҙөктәр килтерә.**

(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).

НИҺАЙӘТ!



# ҮЛӘН ҠАТНАШМАЛАРЫ ТАРТЫУ ТЫЙЫЛДЫ...

## ә тәмәке тартыуҙан үҙең тыйыл

Һуңғы ваҡытта Рәсәйҙә лә, беҙҙең республикала ла сит илдәрҙән хуш еҫле матдәләр (ароматизаторҙар) сифатында индерелеп, тартыу өсөн тәғәйенләнгән үлән ҡатнашмалары киң таралыу тапҡайны. Баҡтиһәң, улар составында наркотиктар кимәле бик ҙур икән. Роспотребнадзор ошо проблема буйынса махсус күҙәтеү ойоштороп, Эске эштәр министрлығы һәм Наркотиктарға ҡаршы дәүләт комитеты менән берлектә тәмәке һәм үлән ҡатнашмалары менән һатыу иткән объекттарҙа тикшереү үткәрҙе. Әммә айырым ведомстволар ғына ошо яңы афәткә ҡаршы тора алмаҫ ине.

Ниһайәт, 2009 йылдың 31 декабрендә Рәсәйҙә тартыу өсөн тәғәйенләнгән үлән ҡатнашмалары әйләнешен тыйыу тураһында РФ Хөкүмәте айырым ҡарар ҡабул итте, һәм ул 2010 йылдың 22 ғинуарынан закон көсөнә инде.

Ошо документ нигеҙендә составына күрәҙәсе шалфейы (йылан тамыры), гавай розаһы орлоҡтары, зәңгәр лотос сәскәһе һәм япраҡтары ингән ҡатнашмаларҙы етештереү, һаҡлау, һатыу, таратыу, контрабанда менән индереү тыйыла. Был үләндәрҙе үҫтерергә лә ярамай. Шулай уҡ тартыу ҡатнашмаларына ингән синтетик каннабиноидтарҙың 23 төрө тыйылған наркотик һәм психотроп матдәләр исемлегенә индерелде.

"Ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы, күрһәтелгән наркотик матдәләрҙе законһыҙ рәүештә әйләнешкә индереүсе кешеләр героин һәм кокаин таратыусыларға тиңләнеп, енәйәти яуаплылыҡҡа тартылыласаҡ", - тип киҫәтә Наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу буйынса федераль хеҙмәт етәкселеге. Ә был закон боҙоусының 10 йылдан 20 йылға тиклем иркенән мәхрүм ителеүе мөмкин, тигәнде аңлата.

Эйе, башҡорттар араһында ҡырын төшөп ятып, кальян тартыусылар күп түгелдер. Әммә бер быуат элек ҡәҙимге тәмәке тартыусылар ҙа булмаған бит беҙҙең халыҡта. Ә кальянға һалып тартылған үлән ҡатнашмаларының ғына түгел, күнегелгән тәмәкенең дә Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте менән саф итеп яралтылған тәнебеҙҙе һәм йәнебеҙҙе ағыулауын онотмаһаҡ ине, тим.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

ИҒТИБАР!

## "Киске Өфө" сайтына рәхим итегеҙ!

Башҡорт телендәге аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенең интернетта үҙенең сайты бар: www.kiskeufa.ru. Сайтҡа инеп, баҫманың һәр яңы һаны менән таныша, төрлө конкурстарыбыҙ тураһында мәғлүмәт ала алаһығыҙ. Меңәрләгән матбуғат баҫмалары баҙарында үҙ урыны, үҙ йөҙө, үҙ һүҙе менән айырылып торған "Киске Өфө" гәзитен уҡығыҙ, уның хаҡындағы мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге, бигерәк тә республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәргә лә еткерегеҙ.

## Яҙылыу дауам итә...

"Киске Өфө"гә 2010 йылдың тәүге ярты йыллығы хаҡтары менән икенсе ярты йыллыҡҡа яҙыла башларға ла була. Хаҡтар шулай: 50665 индекслыһы - **306 һум 84 тин**, 50673 индекслыһы - **294 һум 78 тин.** Беренсе ярты йыллыҡта гәзитһеҙ ҡалғандар 17 февралгә тиклем яҙылһа, "Киске Өфө"нө марттан алдыра башлаясаҡ. Ҡыҫҡаһы... Бергә булайыҡ, бергә уйлайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!

БЫЛ АЙҘА...

# ФЕВРАЛЬ-ШАҠАЙ - фиҙаҡәрҙәр һәм ҡаһармандар айы...

**Февраль айында донъяға килгән Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов "Тыуған көн" шиғырында был айҙағы кисерештәрен шулай һүрәтләй: "Эс бошорғос шуға сәғәт теле, үкһей шуға февраль бураны..." Әлбиттә, шағир был әҫәрендә үҙе донъяға килгән ай хаҡында ғына түгел, барлыҡ ғүмере хаҡында уйланып, шундай һүҙҙәр әйтә. Нимә генә тимә, йылдың һәр айы, һәр миҙгеле үҙенсә матур, йәмле һәм ҡабатланмаҫ. Уралтауҙа, мәҫәлән, февраль айында ағастарға ҡылау ҡунып, улар аҡтан кейенеп, түй ҡылдәгендәге ҡыҙҙы хәтерләтә.**

Һижри буйынса сәфәр һәм рабиғел әүүәл айҙарын үҙ эсенә ала. Борон башҡорттар был айҙы шаҡай тип атап йөрөткән. Айҙың исеменән үк күренеүенсә, бында февралдә көндәрҙең һалҡын тороуы, ошо сәбәпле бар тереклектең "шаҡайып ҡатыуы" күҙаллана. Шуның өсөндәр ҙә 14 февраль - Бөтә донъя ғашиҡтар көнөләр. "Изге Валентин көнө" н, мәҫәлән, юмористар башҡортлаштырып, "Изге Вәлитдин көнө" тип тә атай. Йәнәмәһе, тап ошо көндә Вәлитдин атлы бер башҡорт егете күрше ауылдағы һөйгән ҡыҙы янына барып, ҡолаҡ-танауын туңдырып ҡайтҡан да, шундай шиғыр яҙған, имеш:

Мин - торомбаш ғишыҡ уттарында
Берсә янып, берсә көйөүҙән.
Уйламағыҙ мине өшөгән, тип,
Һыуыҡ тейәме һуң һөйөүгә?

Бына шундай ай ул шаҡай. Ғашиҡтар көнөнән тыш, был айҙа Рәсәй фәне көнө, Дипломатик хеҙмәткәрҙәр көнө, Халыҡ-ара туған тел көнө билдәләнә. Февралдә икенсе тәрлә итеп донъяның талантлы кешеләре тыуған Һыуғоярҙар айы ла тип йөрөтәләр. Башҡортостандың иң талантлы етәксеһе Мортаза Рәхимов та - һыуғояр. Һыуғоярҙарҙы һәр саҡ дөйөм донъя проблемалары борсой һәм улар кешелекте ҡотҡарыу уйы менән йәшәй. Шуға күрә лә февралдә тыуыусыларға фиҙаҡәрлек һәм ҡаһарманлыҡ хас һәм Башҡортостан Республикаһының Дәүләт флагы, Ватанды һаҡлаусылар, шулай уҡ Яугир-интернационалистарҙы иҫкә алыу, Рәсәйҙең хәрби дан (2 февралдә Совет ғәскәрҙәре Сталинград һуғышында немец-фашист ғәскәрҙәрен ҡыйрата), Совет ғәскәрҙәренең Будапешт ҡалаһын фашист илбаҫарҙарынан азат иткән көндәре көнөнөң дә тап ошо айға тура килеүе юҡҡа ғына түгелдер. Быйыл иһә февралдә шағир Ҡадир Даяндың, Башҡортостандың халыҡ рәссамы Мөхәммәт Арыҫлановтың тыуыуына - 100, Башҡортостандың халыҡ артисы Закир Хановтың тыуыуына - 90, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, актер, режиссер һәм педагог Ғабдулла Ғиләжевтың тыуыуына - 80 йыл тулыуы билдәләнәсәк.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Шағир Рамаҙан Шәғәлиев, Башҡортостандың халыҡ артисы Хәмит Яруллин һәм билдәле матбуғат ветераны Сәләх Сукбаевты 75-шәр, композитор Айрат Ҡобағошовты - 60, билдәле яҙыусы, журналист Ш.Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәрзәнә Аҡбулатова менән ауыл хужалығы фәндәре кандидаты Рафиҡ Ноғомановты 50 йәшлек юбилейҙары менән ҡотларға ла онотмайыҡ. Был ҡотлауҙарға "Киске Өфө" гәзите редакцияһы ла ҡушыла.**

Әмир ҒҮМӘРОВ.

СӘЙЛӘҮ ГӘБЕ

# КҮҢЕЛ КӨРЛӨГӨН...

## үҙебеҙ булдырайыҡ!

**Аралашыу тигән матур ғәҙәт бар. "Бар ине..." тип тә әйтке килә. Сөнки, ысынлап та, күҙгә-күҙ ҡарашып аралашыуҙар, күңел булғансы һөйләшеп ултырыуҙар һирәгерәк ҡабатлана торған күренешкә әйләнде хәҙер. Сәбәптәрен һанап тормайыҡ. Ҡыҫҡаһы, аралашыу ҡытлығына тарыныҡ, йәмәғәт. Шуны уйлағанда, беҙҙең "Сәйләү гәбе" рубрикаһы ошо күркәм ғәҙәтте тергеҙеүгә лә булышлыҡ итер һымаҡ әле. Әбйәлил районы Байым ауылында йәшәүсе әхирәтебеҙ, әүҙем авторыбыҙ Әнүәрә апай ХӘЙБУЛЛИНА менән әңгәмә ҡорғандан һуң рубриканың ошо маҡсатына ла ишара яһалды.**

**◆ Әнүәрә апай, "Сәйләү гәбе" рубрикаһын булдырғанда беҙ уның маҡсатын сәй өҫтәле артына йыйылған әхирәттәрҙе аҡыллы, дөрөҫ һөйләшеүгә саҡырыу итеп билдәләгәйнек башта. Бына һеҙ уны халҡыбыҙҙың борондан килгән йолаһы тип раҫлап, сәй өҫтәле артындағы гәпләшеүҙәрҙең ролен киңәйтеп ебәрҙегеҙ бит әле..**

Сәйләү гәбе - борондан килгән матур йола инде ул. Беҙ уны күреп, үҙебеҙ шаһит булып, хатта ҡатнашып үҫтек. Әсәйҙәребеҙ колхоз эшенән бушағаныраҡ мәлдә, йә ямғыр яуып, эшкә бармай өйҙә ултырғанда, ҙур самауырҙы ҡайнатып, күмәкләшеп сәй эсә-эсә гәпләшәләр ине. Һуғыш йылдарында инде күберәк "ҡара ҡағыҙ" алыусыларҙы йыуатыу, балаларҙы аяҡҡа баҫтырыу, ҡыр-баҫыу эштәре тураһында фекер алышыуға ҡорола ине был аралашыуҙар. Ҡул эштәрен дә онотмайҙар, ноҡот бүлеп, йондоҙнамә асып, күңелдәрен дә күтәрәләр. Самауырға нисә тапҡыр һыу өҫтәлеп, нисә тапҡыр ҡайнатыла һуң әле! Аҙыҡты һәр кем үҙе менән килтерә, ашъяулыҡ тулып китә хатта, бала-саға ла улар менән бергә ултыра һәм ололарҙың һәр һүҙен йотоп тыңлай.

**◆ Йылдар үтеү менән күп төбәктәрҙә был йола онотолдо... Иҫеректәр йыйыла торған табындар ғына ҡалды. Йәштәр һәм балалар ҙа шул табындар өлгөһөндә үҫте, үҙҙәре шундай табындар ойоштороrға өйрәнде...**

Күп төбәктәрҙә шулайыраҡ булды шул. Әммә беҙҙең яҡтарҙа, бигерәк тә беҙҙең Әбйәлил районында өләсәйҙәрҙең сәйләү гәптәре йолаһын әсәйҙәребеҙ, шунан беҙ дауам иттек, хәҙер ул йоланы йәш быуын да тота, тиер инем. Ҡатын-ҡыҙҙар бер-нисә төркөмгә бүленешеп, йәштәрҙе лә ололар менән аралаштырып саҡырышабыҙ: йәштәр ололарҙан фәһем дә ала, табын да әҙерләшә. Бер төркөм сәйләү гәбе йолаһын башлап ебәрә, ҡалғандар дауам итә. Шуға ла беҙ йыл әйләнәһенә бер-беребеҙгә сәй эсергә йөрөшәбеҙ. Унда беҙ донъя хәлдәре тураһында, баштан үткәндәрҙе, сихәтләнеү тәжрибәһенән дарыу үләндәре, сигеү-бәйләү кеүек ҡул эштәребеҙ тураһында иркенләп һөйләшәбеҙ. Йома көнөн бер ҙә мәхрүм итмәйбеҙ: сәйгә 1-2 кеше булһа ла йыйылабыҙ. Ул саҡта иһә дини йолаларҙы, доғалар өйрәнәбеҙ, белгәндәребеҙ менән уртаҡлашабыҙ.

Ҡышҡы сәйләү гәптәренә яҙҙан уҡ әҙерләнәбеҙ, тиергә була: май айы үләндәрен тоҙлайбыҙ, киптерәбеҙ, eләк-емештән ҡайнатма яһайбыҙ, салаттар консервалайбыҙ. Әҙерләгән аҙыҡтарыбыҙҙы "Быныһын - ураҙа ваҡытында ауыҙ асҡанда ашарбыҙ", "Был ҡайнатманы тыуған көнөмдә сәй табынына ҡуйырмын", - тип тәғәйенләп ҡуябыҙ хатта.

Көҙҙә оҙатҡанда, әбейҙәр сыуағындa, тәбиғәткә сығабыҙ, унда самауыр сәйе эсеп, "мундир" картуф ашау ләззәтен татыйбыҙ. Кемдә ниндәй тәмләкәс бар, шуны килтереп, табын ҡорабыҙ, йә яланда уҡ ҡоймаҡ ҡойоп алабыҙ. Быйыл сәйләү гәбенә тағы бер йөкмәтке өҫтәнек: йәш ҡорот менән сәй эсеү йолаһын башланы бер төркөм әхирәттәр. Йәш ҡоротто, ваҡ ҡына итеп йомарлап, сәй янына ҡуябыҙ ҙа, шәкәрләп йә ҡаймаҡлап ашайбыҙ. Тәмле! Унан һуң, һәр хужабикә ҡоротто үҙенсә яһай бит, шуны күҙ уңында тотоп, табында һәр кемдең үҙ сере менән уртаҡлашыуын да шарт итеп ҡуябыҙ бындай осрашыуҙарҙа. Үҙенә күрә, ҡорот яһау оҫталығына бәйге һымаҡ килеп сыға.

**◆ Моғайын, Яңы йыл байрамын да сәйләү гәбе менән үткәргәнһегеҙҙер әле?**

Яңы йылда һәр кем ғаиләһе менән үҙ өйөндә байрам итә бит инде. Шуға ла беҙ, сәйләү гәбенә йыйылырға яратыусы әхирәттәр, был байрамды алдаңыраҡ үткәрәбеҙ. Һеҙ "Киске Өфө"нөң 52-се һанында яҙғайнығыҙ һәм уҡыусыларҙы телевизор экрандарына ҡарап, артистарҙың тәрләсә ҡыланғанына теклəп, уфтанып ултырмағыҙ, ә самауырығыҙҙы ҡуйып, мунсағыҙҙы ягып, күршеләрегеҙҙе сәйгә саҡырып, онотолмаҫлыҡ байрам эшләгеҙ үҙегеҙгә, тип яҙғайнығыҙ. Беҙҙең дә шулайыраҡ килеп сыға инде байрамыбыҙ: Яңы йыл алдынан кемдә яғылған, шунда мунса инеп сығабыҙ ҙа, сәй өҫтәле артында йырлашабыҙ, бейешәбеҙ, ҡотлашабыҙ, бер-беребеҙгә изге теләктәр теләшәбеҙ.

Ауылыбыҙ Байым булһа,
Урамыбыҙ - Тыныслыҡ,
Сәйләү гәбе табынында
Ултырабыҙ тынысләп, - тигән булабыҙ. Онотолмаҫлыҡ итәбеҙ шулай аралашыуҙарҙы.

"Сәйләү гәбе" йолаһы - ул аралашыу, танышыу, дуҫлашыу, хәл белешеү, рух байытыу, кешегә дәрт өҫтәүсе, һыр бирмәйем, ҡанат ҡалҡытам, киләсәктең һәйбәтлегенә ышанам, тигән тормош һабаҡтары биреүсе йола. Шул йоланы атҡарыусылар башҡа яҡтарҙа ла бармы икән - яҙып ебәрһендәр әйҙә беҙҙең "Киске Өфө"бөҙгә.

**◆ Рәхмәт, Әнүәрә апай. Бына ниндәй оптимислыҡ, дәрт менән йәшәй донъябыҙ ҡотон, халҡыбыҙ ҡомартҡыларын һаҡлаусы Әбйәлил ҡатын-ҡыҙҙары. Ә шулай ҙа, яҡшы нәмә ул оптимислыҡ, йәғни күңел көрлөгө! Бер танышым һөйләп торҙо: "Яңы йылды ҡаршылағас, ауылға әсәйемә шылтыраттым. "Әсәй, нисек кенә ҡаршыланың байрамды? Яңғыҙ ғына ултырғанһыңдыр инде?" - тим өҙгөләнеп. "Юҡсы, нишләп яңғыҙ ултырайым. Самауырымды ҡайнаттым, ҡоймағымды бешерҙем дә, Менәүәрә әхирәтемде ҡунаҡҡа саҡырҙым. Икәүләп ҡаршыланыҡ Яңы йылды. Бик күңелле булды..." - тине әсәйем. Уның был һүҙҙәрен ишетеп, ҡәҙерле кешемдең кәйефе күтәренке икәнен шәйләгәс, минең дә күңелем күтәрелде. Телефонды һалып, бер аҙ ваҡыт үткәс, ҡапыл башыма уй килде: "Тукта, кем һуң әле Менәүәрә әхирәт тигәне?.. Бәй, әсәйемдең үҙенең исеме Менәүәрә лә инде...". Ҡыҫҡырып тороп көлөп ебәрҙем. Бына шундай кеше инде ул минең әсәйем..." Танышымдың һөйләгәндәре минең дә кәйефте күтәрҙе. Афарин күңел көрлөгән һаҡлаған апайҙар, инәйҙәр! Афарин оптимистар!**

Гөлбаныу ГӘРӘЕВА әңгәмәләште.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Республика йортонда район һәм ҡалаларҙан йыйылған Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына миҙалдар тапшырҙы. "1941-1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 65 йыллығы" юбилей миҙалдары уларға РФ Президенты Указына ярашлы бирелде.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ултырышында Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын байрам итеүгә әҙерлек мәсьәләләре ҡаралды. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда барлығы 12370 һуғыш ветераны йәшәй, шуларҙың 3698-е - һуғыш инвалиды. Бынан тыш, республикала 32 меңдән ашыу һуғыш ветераны һәм инвалидының ғаилә ағзаһы, шулай уҡ 79 меңдән ашыу һуғыш йылдарының тыл ветерандары бар.

✓Башҡортостанда 320 Бөйөк Ватан һуғышы инвалидына енел автомобиль тапшырылған. Уларҙың 99-ы машина урынына 100 мең һум күләмендә компенсацияға өҫтөнлөк биргән. 2005-2009 йылдарҙа 463 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны һәм инвалиды торлаҡ менән тәьмин ителгән. Тағы 35 ветерандың документтары әҙерләнә.

✓Берлинда үткәрелгән "Йәшел аҙна" күргәҙмә-йәрминкәһендә Башҡортостандан "Башспирт" һәм Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге ҡатнашып, яҡшы сифатлы продукция өсөн Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә Гран-при, брендтарҙың үҙенсәлекле биҙәлеше һәм аҙыҡ-түлек тауарҙарының юғары тәм сифаттары өсөн өс диплом һәм ике миҙал алып ҡайтты. Немецтар Башҡортостан тауарҙары сифатын юғары баһалаған һәм Германияның эре сауҙа селтәрҙәре башҡорт балын, шулай уҡ "Башспирт"тың ҡайһы бер продукцияһын һатып алыуға килешеүҙәр төҙөгән.

✓Быйыл Башҡортостанда Ватанды һаҡлаусылар көнө байрамы айҡанлы 20,21,22,23 февраль көндәрендә ял итәсәкбеҙ. Ә 8 март байрамы ваҡытында өс көн рәттән ял тура килә.

✓Үткән ял көндәрендә Өфөлә боҙҙа мотоуҙыш буйынса Европа чемпионаты булғайны. Унда Өфө егете Андрей Шишегов еңеүсе булды.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# БЕРҘӘМ РӘСӘЙ - УНИТАР РӘСӘЙМЕ?

## Йәғни Конституция буйынса хоҡуҡи ликбез



Хөрмәтле Борис Вячеславович! Һеҙҙең "теге" тәҡдимдәрегеҙҙе ишетеп ҡалдым әле. Төбәктәрҙе берләштереү тураһындағыһын, тим. Тағы ла төбәктәрҙең закондар сығарыу органдарын бер палаталыға ҡалдырыу хаҡындағыһын да. Уларҙың атамаларын бер төрлө итеү тураһындағын да. Һәм тағы ла төбәк башлыҡтарын бер төрлө атау тураһындағы идеяларығыҙҙы ла. Ни әйтергә инде? Шәп. Иҫ киткес шәп. Баштар әйләнеп китә хатта. Һеҙҙең кимәлдәге дәүләт эшмәкәре ауыҙынан бындай... шаҡ ҡатырғыс идеяларҙың яңғырауы буштан түгел бит ул. Һеҙҙең етешкән сәйәсмән булыуығыҙҙы күрһәткән фекерҙәр был. Хатта сәйәсмән генә түгел, етәксе, йәғни үҙ артынан халыҡты етәкләп алып китеп барыусының фекерҙәре был, тип әйтер инем. Быға тиклем берәү ҙә (Жириновскийҙы иҫәпкә алмағанда, әлбиттә) бындай идеяларҙы яңғырата алғаны юҡ ине. Һеҙ - беренсе. Хатта Борис Беренсе. Шәп яңғырай бит!

Шатмын. Һеҙҙең өсөн ҡыуанам. Бына бит, кешеләр күҙ алдында үҫә. Күптән түгел генә һеҙ "погонлы әүермәндәр"ҙе елкәләренән алып һелкә инегеҙ. Әле иһә Рәсәй Конституцияһын һелкетеп алырға булдығыҙ. Эйе, эйе. Иҡтисади йәһәттән уңышҡа өлгәшә алмай, Үҙәктән аҡса көтөп ятҡан (дотациялы) төбәктәрҙе "донор"ҙар менән берләштерергә тәҡдим итеү - ул дәүләтебеҙҙең Төп Законын боҙорға маташыу, тигән һүҙ түгелме? Унда нимә тип яҙылғанын беләһегеҙме икән? Моғайын, алдығыҙҙа яталыр (өҫтәл китабы һымаҡ), асығыҙ әле 5-се статьяһын. Уҡығыҙ. "Рәсәй Федерацияһы республикаларҙан, крайҙарҙан, өлкәләрҙән, федераль кимәлдәге ҡалаларҙан, автономия өлкәһенән, автономия округтарынан - Рәсәй Федерацияһының тигеҙ хоҡуҡлы субъекттарынан тора" тип яҙылғанмы шул? Ә шул уҡ Төп закондың "Федератив ҡоролош" тип аталған бүлегенең 65-се статьяһында ошо субъекттар исемләп атап үтелә - Адыгея Республикаһынан алып Ямал-Ненец автономиялы округына тиклем. Бына шулай.

Урыҫ халҡының "Закон - тәртә, ҡайҙа кәрәк - шунда тарта" тигән мәҡәлен иҫкә төшөрмәксеһегеҙме? Конституцияны ла үҙгәртергә була, тимәксеһегеҙме? Рәсәй Конституцияһынан тағы ла бер статьяны килтермәксемен. "Конституцияға төҙәтмәләр һәм Конституцияны ҡайтанан ҡарау" тип аталған 9-сы бүлектәге 134-се статьяла "Рәсәй Федерацияһы Конституцияһына төҙәтмәләр һәм ҡайтанан ҡарау тураһындағы тәҡдимдәрҙе Рәсәй Федерацияһы Президенты, Федерация Советы, Дәүләт Думаһы, Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте, Рәсәй Федерацияһы субъекттарының закондар сығарыусы органдары, шулай уҡ Федерация Советы ағзаларының йәки Дәүләт Думаһы депутаттарының биштән бер өлөшөнән дә кәм булмаған төркөмө индерә ала", тип әйтелә. Ә бит, хөрмәтле Борис Вячеславович, һеҙ әлегә президент түгелһегеҙ. Эйе, һеҙ - Дәүләт Думаһы Рәйесе. Конституцияла һеҙҙең вазифа хаҡында бер һүҙ ҙә юҡ. Аңлайым, теләһәгеҙ, һеҙ ярты Думаны (хәйер, һеҙ етәкләгән "Берҙәм Рәсәй" партияһының ағзалары унда яртыһынан да күберәктер) Конституцияға үҙгәрештәр һәм төҙәтмәләр индереүсе төркөм итеп тәҡдим итә алаһығыҙ. Тик улар араһында ла бит Мәскәү халҡы ғына түгел. Улар үҙ төбәктәрен юҡ итеүгә риза булырмы икән?

Тағы ла. Бөгөн ҡайһы төбәкте генә алып ҡарама, бөтәһе лә тиерлек Үҙәктән дотация алып ултыра. Атамалары төрлө булыуы мөмкин. Асылы бер үк ҡала. Ваҡыты шулай. Урамда көрсөк. Финанс министры "көрсөк тамам" тип әйтеү менәнме ни? Икенсе яҡтан ҡарағанда, Үҙәк урындарҙан бар аҡсаны үҙенә һурып тик ултыра бит. Закондар шулай, Һалым кодексын урап үтеп булмай, тиҙәр. Былай илебеҙ бик ярлыларҙан һаналмай. Яңынан-яңы ҡорал уйлап сығарыуға, уларҙы һынауға аҡса табылып ҡына тора. Әле бына күптән түгел генә халыҡ-ара кредит ойошмаларына булған бурысыбыҙҙы түләп бөттөк, тигән хәбәр ишетелде. Шәп бит был. Шул уҡ ваҡытта төбәктәрҙе һәр саҡ ҡыҫынҡырап тоторға кәрәк. Үгәй әсәй шулай иренең балаларын ҡаты тота, тиҙәр бит. Бында ла шул уҡ хәл.

Ғөмүмән, төбәктәрҙе бер сафҡа баҫтырыу - ул юғары пилотаж. Шуға ла закондарҙы уҡыуҙы дауам итәм. Икенсе бер тәҡдимегеҙ төбәктәрҙәге закондар сығарыу органдарының атамаларын бер төрлө итеү ине. Йәғни, унификациялау. Һәм дә уларҙы бер палаталыға ҡалдырыу. Һәйбәт эш ул. Советтар Союзында улар бөтәһе лә Юғары Совет (республикаларҙа), йәки халыҡ депутаттары Советы (өлкәләрҙә) тип аталды бит. Бөгөн дә шулайтырға мөмкин. Юғиһә, милли республикалар бигерәк аяуһыҙ ҡылана: беренһендә - Ил-Ҡоролтай, икенсеһендә - Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай, өсөнсөһөндә - Дәүләт Советы, дүртенсеһендә - Халыҡ Хуралы, бишенсеһендә - Ил Тумэн... Тел дә әйләнмәй бит. Бер ранжирға баҫтырырға - вәссәләм. Нечего бында выпендриваться, шулай бит?

Ҡапыл күҙемә бер закон салынды. "Рәсәй Федерацияһы субъекттарының закондар сығарыу һәм башҡарма дәүләт власы органдарын ойоштороуҙың дөйөм принциптары тураһында" тип атала ул. 1999 йылда уҡ ҡабул ителгән. Унан һуң ҡырҡлап үҙгәреш индерелгән. Шул закондың II бүлегенең 4-се статьяһында "Рәсәй Федерацияһы субъектының закондар сығарыу дәүләт власы органының атамаһы, уның структураһы Рәсәй Федерацияһы субъектының конституцияһы (уставы) менән Рәсәй Федерацияһы субъектының тарихи, милли һәм башҡа мираҫын иҫәпкә алып булдырыла" тиелгән. Йәғни, башҡорттар элек-электән бар милләттең яҙмышына, киләсәгенә йоғонто яһарлыҡ ҡарар ҡабул итер өсөн Ҡоролтайға йыйылған икән, беҙ бынан бөгөн дә баш тартырға йыйынмайбыҙ.

Артабанғы һүҙем һеҙҙең тәҡдимдәрегеҙ хаҡында түгел. Әммә барыбер шул уҡ юҫыҡта. "Берҙәм Рәсәй"ҙең, хатта ҡайһы берәүҙәр бик ныҡ теләһә лә, унитар була алмауы аңлашыла. Милли, тел, мәҙәни төрлөлөк кенә илдең үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Советтар Союзы осоронда бер телдә генә һөйләшкән, тарихы 1917 йылда башланған бер "милләт" булдырып ҡарағайныҡ бит инде. Шул уҡ тырмаға ҡабат баҫмайыҡ әле.

Иғтибар иттегеҙме, юҡмы, үткән аҙнала Ванкуверҙағы Ҡышҡы Олимпиадаға барасаҡ Рәсәй йыйылма командаһының ағзалары билдәле булды. Уларға тантаналы рәүештә кем фатиха бирҙе, тип уйлайһығыҙмы? Күргәнһегеҙҙер, моғайын. Мәскәү һәм бөтә Рәсәй Патриархы Кирилл. Ғәфү итегеҙ, Борис Вячеславович, тағы ла Конституциябыҙҙы асҡанға. 14-се статьяға күҙ һалығыҙ әле. Нимә тиелгән унда? "Рәсәй Федерацияһы - донъяуи дәүләт. Бер ниндәй ҙә дин дәүләт дине йәки мотлаҡ дин сифатында билдәләп ҡуйыла алмай. Дини ойошмалар дәүләттән айырылған һәм закон алдында тигеҙ хоҡуҡлы". Йәғни, беҙ Олимпиадаға Рәсәй Федерацияһының йыйылма командаһын оҙатабыҙмы, әллә урыҫ православие сиркәүенекенме? Әллә йыйылма командала башҡа дин тотҡан спортсылар юҡмы? Аңлауымса, сиркәүгә, синагогаға йәки мәсеткә барыу-бармау һәр бер кешенең шәхси эше. Әгәр ҙә саңғы шыуыусы уға еңергә Алла ярҙам итә, тип һанаһа, барһын сиркәүгә үҙе, ярҙам һәм көс һораһын. Уға бит берәү ҙә ҡаршы тормай.

Ошо уҡ хәл Рәсәй армияһында ла ихласлап тороп ҡулланыла башланы. 1 февралдән Ҡораллы көстәрҙә хәрби капелландар барлыҡҡа киләсәк. Әлегә граждан хеҙмәткәр сифатында ғына. Йәғни, погонһыҙ ғына. Дәүләт уларға эш хаҡы ла түләмәксе - командирҙың дини хәрби хеҙмәткәрҙәр менән эшләүсе ярҙамсыһы айына 20-25 мең һум аҡса аласаҡ. Эйе, мосолман һалдаттар суҡынмаҫҡа ла мөмкин. Әммә был бит армия, унда бөтәһе лә бер иш. Хас та һеҙ теләгәнсә - ранжир буйынса. Командирҙарҙың "Суҡынырға тигәс, бөтәһенә лә суҡынырға" тигән яңы командаһы барлыҡҡа килмәҫ микән?

Борис Вячеславович, һеҙ әлифбаны яҡшы беләһегеҙ, шулай бит? А, Б, В һәм башҡалар. Йәмғеһе - 33 хәреф. Беҙгә (йәки һеҙгә) Рәсәй халыҡтарының алфавитын төҙөргә ваҡыт еткән, тигән уйҙамын. А - адыгтар, аварҙар, абазиндар, Б - башҡорттар, бүрәттәр, балҡарҙар, В - вепстар һәм водьтар... Э - эвенктар, энцтар, эскимостар, Ю - юкагирҙар, Я - яҡуттар. Һәм уны быға тиклем ҡабул ителгән алфавит (А - арбуз, Б - барабан, ... Я - яблоко) урынына мәктәптә ҡулланырға. Бәлки, шул саҡта киләһе быуын сәйәсмәндәре илебеҙҙең күп милләтле икәнен бала сағынан уҡ белеп, уларға ихтирам менән ҡарарға өйрәнер. Бәлки, шул саҡта төбәктәрҙе берләштереү, илде унитар дәүләткә әүерелдереү кеүек "бөйөк" уйҙар уларҙың башына инеп тә сыҡмаҫ. Ә?

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Быйыл Башҡортостан 48 млрд һумлыҡ 48 инвестиция проектын тормошҡа ашырырға уйлай. Был проекттарҙың өсәүһе генә тормошҡа ашырылған хәлдә лә республикала өҫтәмә 3 мең яңы эш урыны булдырыласаҡ. Шулай уҡ ағас эшкәртеү тармағын үҫтереүгә иғтибар артасаҡ. Был ниәт тормошҡа ашһа, биш йылда 10 меңгә тиклем эш урыны булдырыу мөмкинлеге тыуасаҡ.

✓ 11 февралдә Башҡортостан Республикаһы Президенты һәм Премьер-министр призҙарына XVII Саңғы спорты фестивале старт ала. Саңғы спортын һөйөүселәр Өфө районының Авдон ҡасабаһы эргәһендә һәм Октябрьский ҡалаһында үтәсәк ярыштарҙа ҡатнаша аласаҡ.

✓ Өфөнөң "Биатлон" спорт-һауыҡтырыу комплексында 26 йәшкә тиклемге спортсылар араһында биатлон буйынса Рәсәй беренселеге бара. Ярыш һөҙөмтәләре буйынса Европа чемпионатында ҡатнашасаҡ спортсылар һайлап алынасаҡ.

✓ "Нефтяник" спорт комплексында бокс буйынса республика чемпионаты бара. Ул мартта үтәсәк Волга буйы федераль округы чемпионатына көслө ҡатнашыусыларҙы һайлап алыу турниры булып та тора. 30 ғинуарға тиклем дауам итәсәк ярыштарҙа 1991 йылдан һуң тыуған спортсылар ҡатнаша.

✓ РФ Сил ил эштәре министрлығының Өфөләге вәкиле итеп Илшат Миңнебаев тәғәйенләнде. Илшат Рәид улы Рәсәй Сит ил эштәре министрлығы ҡарамағында 1999 йылдан төрлө дипломатик вазифаларҙа эшләгән.

✓ Был ял көндәрендә "Аҡбуҙат" ипподромында конкур буйынса Башҡортостан Республикаһының Асыҡ кубогы үтә. Турнирға ат спорты ветераны, олимпиада чемпионы Вячеслав Чукановтың килеүе көтөлә.

✓ Өфөнөң 31-се мәктәбе биләмәһендә яңы физкультура-спорт үҙәге асылды. Уны асыу тантанаһында БР Президенты ла ҡатнашты. Былтыр республикабыҙҙа "Рәсәй Федерацияһында физик культураны һәм спортты үҫтереү" маҡсатлы федераль программаһы сиктәрендә ошондай 9 объект сафҡа ингәйне. Быйыл да был программа сиктәрендә "Өфө-Арена"ның икенсе сиратын, Сибайҙа боҙ һырғалағы, Стәрлетамаҡта боҙ һарайы төҙөү күҙаллана.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## МӘСКӘҮЛЕЛӘР ЯРАТА

**"МИАН" күсемһеҙ милек агентлығы аналитиктары бер төбәктән икенсеһенә күсеп йөрөүсе рәсәйлеләр тураһындағы мәғлүмәттәрҙе анализлағандан һуң, шундай ҡыҙыҡ һығымталарға килгән.**

Тикшеренеүҙәр нигеҙе итеп улар төбәк-ара килешеүҙәрҙе ала. Иң таралған йүнәлеш булып Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһе тора. Бында күбеһенсә Санкт-Петербург, Тверь, Түбәнге Новгород, Липецк, Ҡаҙанда йәшәүселәр тартыла. Иң ҡыҙыҡлыһы шул: мәскәүлеләр йәшәргә күскән ҡалалар араһында Өфө икенсе урында тора. Беренсе урында - Белгород, ә өсөнсөһөндә - Санкт-Петербург, унан һуң Воронеж, Ҡаҙан, Краснодар һәм Ярославль килә. Аналитиктар Мәскәү ҡалаһын алмайынса, иң популяр төбәк-ара йүнәлештәрҙе лә асыҡлаған. Был категория-ла күсемһеҙ милек менән эш итеү буйынса Ҡаҙан-Өфө йүнәлеше беренсе урында. Артабан Екатеринбург-Силәбе, Ҡаҙан-Екатеринбург, Ҡаҙан-Яр Саллы, Санкт-Петербург -Түбәнге Новгород килә. "Беҙҙең баһалар буйынса, 2010 йылда төбәк-ара килешеүҙәр тағы ла артасаҡ, - тип белдерә "МИАН" агентлығы директоры Инна Игнаткина. - Өфө һәм Башҡортостан күптәрҙе үҙенә йәлеп итә, был турала миграция һөҙөмтәләре күрһәтә. Төбәккә халыҡтың күпләп ағылыуының сәбәптәре күп төрлө, шулай ҙа иҡтисади һәм социаль тотороҡлоҡ төп урынды биләй".

## СИТ ИЛ ПАСПОРТЫНЫҢ...

**БР буйынса Федераль миграция хеҙмәте идаралығы үткән йылға йомғаҡтар яһаны.**

2010 йылдың 1 ғинуарына идаралыҡ тарафынан 82664 сит ил гражданины, шул иҫәптән, 5614 кеше даими, 77050-һе ваҡытлыса йәшәү урыны буйынса теркәлгән. Ваҡытлыса йәшәү урыны буйынса миграцион иҫәпкә алыныусыларҙың күп өлөшөн визаһыҙ граждандар тәшкил итә һәм бөгөнгө көнгә уларҙың һаны 64977-гә еткән.

2009 йылда сит ил кешеләренә һәм гражданлыҡтары булмаған 6001 кешегә - ваҡытлыса йәшәүгә, 21344-енә эшләргә рөхсәт бирелгән. Рәсәй гражданлығына 8243 кеше ҡабул ителгән, 1160 эшкә рөхсәт биреүсе ҡағыҙ яраҡлы түгел тип табылған.

Идаралыҡ хеҙмәткәрҙәре сит ил граждандары йәшәгән объекттарҙы ла тикшереп тора. Бигерәк тә торлаҡ секторы, баҙар, төҙөлөш һәм башҡа объекттарға ҙур иғтибар бирелә. Былтыр административ закон боҙоуҙар тураһында 66980 протокол төҙөлгән. Республиканың ҡала һәм райондары суды ҡарары буйынса 838 сит ил граждан-ны республиканан сығарылған.

2009 йылда идаралыҡ тарафынан 80242 сит ил паспорты бирелгән, уларҙың 40249-ы яңы төрҙәге паспорттар.

Дәүләт миграция сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса маҡсатлы эш алып барыу һөҙөмтәһендә 2010 йылдың 1 ғинуарына идаралыҡ федераль бюджетҡа - 127 млн 362 мең һум (дәүләт һалымдары өсөн), урындағы ҡаҙнаға - 67 млн 804 мең 802 һум (штрафтар түләү өсөн) аҡса күсергән.

*ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...*



**Йыл һайын торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр яңынан ҡарала. Хаҡтарҙың артыуында урындағы властарҙы ғәйепләү дөрөҫ түгел, сөнки беҙ хоҡуҡи дәүләттә йәшәйбеҙ һәм уның закондарына буйһонорға тейешбеҙ. Шулай, "Торлаҡ-коммуналь хужалығын реформалауҙа ярҙам итеү фонды тураһында"ғы Федераль закон талаптарына ярашлы, элек халыҡҡа күрһәтелгән коммуналь хеҙмәттәрҙең ҙур ғына өлөшөн юғарыраҡ ставкалар буйынса түләүсе сәнәғәт предприятиелары ҡаплаһа, хәҙер тигеҙләү процесы башланды. 2011 йылдың 1 ғинуарына ресурстар барыһы өсөн дә бер тигеҙ торасаҡ һәм кем күпме тотона, шулай түләйәсәк.**

# ЯҢЫ ТҮЛӘҮҘӘР...

## бер аҙ кеҫәгә һуға

### Торлаҡ өсөн түләү

2010 йылда торлаҡ йорт өсөн түләү күләме 5 проценттан, ә йылылыҡ энергияһын "Башкирэнерго" йәмғиәтенән алыусы граждандар өсөн коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү (билдәләнгән нормативтар һәм торлаҡ йорттоң социаль нормаһы сиктәрендә ) 26 проценттан артмаясаҡ, тип көтөлә. Өфө ҡалаһы буйынса индекстар күтәрелмәгән.

Торлаҡ йорттарҙы төҙөк тотоу һәм ремонт өсөн түләү ҙә 5 проценттан артмаясаҡ, тип ышандыра ҡала етәкселеге. Бында күп фатирлы йорт менән идара итеү буйынса хеҙмәттәр һәм эштәр, уның дөйөм мөлкәтен (подвал һәм сарлаҡтар, подъездар, ҡыйыҡтар, дөйөм коммуникацияларҙы, лифттарҙы техник хеҙмәтләндереү, сүп-сарҙы сығарыу, йорт янындағы территорияны ҡарау) төҙөк тотоу һәм ремонтлау өсөн түләүҙәр ҙә инә.

2010 йылда федераль закон талабы буйынса, торлаҡ йорттарҙы төҙөк тотоу һәм ремонт өсөн түләү иҫәбенән дөйөм ҡулланыу урындарын яҡтыртыуға тотонолған электр энергияһы һәм лифт өсөн түләүҙәр алып ташланған. Электр энергияһы коммуналь ресурс булғанлыҡтан, уның был өлөшө ТКХ өсөн түләү квитанцияһында айырым, дөйөм йорт кәрәк-ярағы өсөн (общедомовые нужды - ОДН), тип билдәләнәсәк.

Торлаҡ йорттарҙы төҙөк тотоу һәм ремонт өсөн түләү составында ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын сығарыу һәм утилләштереү хеҙмәте быйыл элеккесә ҡала һәм айына дөйөм майҙандың 1 квадрат метрына 80 тин тәшкил итә. Дөйөм алғанда, торлаҡ йорттарҙы төҙөк тотоу һәм ремонт өсөн түләү йорттоң төҙөклөгөнә ҡарап, дөйөм майҙандың квадрат метры 9 һум 6 тиндән 15 һум 39 тингә тиклем тәшкил итәсәк.

Былтырғы кеүек, 2010 йылда ла күп ҡатлы йорттоң беренсе ҡатында йәшәүселәр лифттарҙың техник хеҙмәте өсөн түләүҙән азат ителә. Улар өсөн торлаҡты төҙөк тотоу һәм ремонт өсөн түләү 12 һум 53 тиндән 14 һум 23 тин тирәһе тәшкил итәсәк. Күп фатирлы йорттоң башҡа ҡаттарында йәшәүселәргә бер лифтты техник хеҙмәтләндереү 5 тингә арта һәм айына дөйөм майҙандың квадрат метры 1 һум 16 тин тәшкил итә.

Подъезда йоҙаҡ-һөйләшеү саралары булып та, фатирҙарында домофон булмаған граждандар мөрәжәғәте буйынса, был сараларҙы техник хеҙмәтләндереү өсөн түләү 2 статьяға бүленде. Дөйөм алғанда, был хеҙмәт 1 фатирға айына 25 һум 4 тингә төшә: йорт эсендәге ҡоролма - 16 һум 69 тин, фатирҙағыһы - 8 һум 35 тин торасаҡ.

Телевидениены коллектив ҡабул итеү системаһы менән ҡулланыу үҙгәрешһеҙ ҡалды, ул айына 25 һум 70 тин тора.

РФ Торлаҡ кодексына ярашлы, капиталь ремонт буйынса сығымдарҙы торлаҡ йорт хужалары ҡаплай. Дөйөм йыйылышта торлаҡ йортто капиталь ремонтлау өсөн түләү күләмен билдәләү тураһында ҡарар ҡабул итмәүселәргә ҡала хакимиәте түләүҙе дөйөм майҙандың 1 квадрат метрына 2 һум 30 тин көйө ҡалдырырға тәҡдим итә. Шулай итеп, Өфө ҡала округы хакимиәте тарифты көйләүсе орган булараҡ, халыҡ өсөн тарифҡа хаҡтар күтәрелеүен мөмкин тиклем кәметеүгә көс һала.

### Коммуналь хеҙмәттәр

2010 йылда һыу менән тәьмин итеүҙең 1 куб метры 9 һум 39 тин, ә һыу таратыу хеҙмәте өсөн 8 һум 04 тин билдәләнгән. 2010 йылда халыҡты һыу менән тәьмин итеү һәм һыу таратыу хеҙмәте үҫеше 30 процент тәшкил итәсәк, ә предприятиелар өсөн түбәнәйәсәк. Шулай итеп, быйыл һыу менән тәьмин итеү һәм һыу таратыу хеҙмәте өсөн халыҡ уның тулы хаҡынан 77,6 процентын түләргә тейеш була (2009 йылда 65,6 процент ине).

Башҡа төр коммуналь хеҙмәттәргә: электр, газ һәм йылылыҡ менән тәьмин итеү өсөн тарифтарҙы Башҡортостан Республикаһының Тарифтар буйынса комиссияһы билдәләй.

1 ғинуарҙан "Башкирэнерго" етештергән ҡайнар һыуҙың 1 кубометры (һыу таратыуҙан тыш) - 31 һум 91 тин тора, тариф үҫеше - 27,1 процент.

Йылылыҡ энергияһының 1 гигакалорийы - 613 һум 36 тин, үҫеш - 26 процент. Шулай итеп, айырым фатирҙарҙа һәм фатир тибындағы ятаҡтарҙа фатирҙың дөйөм майҙанының һәр квадрат метры өсөн 14 һум 36 тин түләргә тура киләсәк.

Газ плитәләре менән йыһазландырылған йорттарҙа йәшәүселәр 1 киловатт-сәғәт өсөн 1 һум 74 тин түләйәсәк. Электр плитәләре менән ҡулланыусыларға һәр киловатт-сәғәт 1 һум 21 тингә төшәсәк. Әгәр ҙә былтыр тәбиғи газдың хаҡы квартал һайын үҙгәрһә, 2010 йылда ул ике тапҡыр ғына үҙгәрәсәк. 1 ғинуарҙан аҙыҡ әҙерләү һәм һыу йылытыу өсөн ҡулланылған тәбиғи газдың 1 кубометры - 3 һум 99 тин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үткән йыл менән сағыштырғанда, коммуналь хеҙмәттәрҙең айырым төрҙәре буйынса үҫеш индексы айырылһа ла, баш ҡалала 2010 йылда торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр үҫеше 20 проценттан артманы.**

**Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтар артыу торлаҡ өлкәһе хеҙмәткәрҙәрен электр энергияһын экономиялау буйынса саралар күрергә мәжбүр итә. Мәҫәлән, Өфөнөң күп фатирлы йорттарының барыһында ла тиерлек һыуыҡ һәм ҡайнар һыуҙы, йылылыҡты иҫәпләүсе приборҙар ҡуйылған. Дөйөм ҡулланыу урындары энергия һаҡлаусы лампалар менән яҡтыртыла, кешенең барлығы йәки юҡлығына тәьҫир итеүсе автоматик датчиктар ҙа баҫҡыс майҙансыҡтарында утты экономияларға мөмкинлек бирә. Торлаҡ йорттарҙа йылылыҡ энергияһын ҡулланыуҙы түбәнәйтергә мөмкинлек биреүсе яңы, заманса ҡорамалдар ҡуйыла башланы.**

**Әйткәндәй, быйыл да Рәсәй Хөкүмәте тарафынан билдәләнгән барлыҡ льготалар үҙ көсөндә ҡала. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәте өсөн түләүҙәр ғаилә бюджетының 22 процентынан юғарыраҡ өлөшөн алып тороусы граждандар билдәләнгән тәртиптә субсидия юллай ала.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы оператив кәңәшмәлә баш ҡалалағы спорт ҡоролмаларының нисек файҙаланылыуын тикшереп сығырға ҡушты. Уның әйтеүенсә, бюджет аҡсаһына төҙөлгән ҡайһы бер спорт ҡоролмаларында халыҡты хеҙмәтләндергән өсөн законһыҙ түләү алыу осраҡтары күҙәтелгән. "Һүҙ ихаталарҙа, мәктәп янында төҙөлгән хоккей майҙансыҡтары тураһында бара, - тине Павел Рюрикович. - Улар дөйөм ҡулланылыу өсөн төҙөлгән һәм түләүһеҙ хеҙмәтләндерергә тейеш".

✓Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығы алдынан Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын фатирҙар менән тәьмин итеүҙән тыш, фатиры булған ветерандарҙың да торлағына капиталь ремонт үткәреләсәк. Был хаҡта оператив кәңәшмәлә Павел Качкаев хәбәр итте. Иҫәпләүҙәр буйынса, баш ҡалала 100 һуғыш ветеранының фатиры ремонт талап итә. Дөйөм алғанда, Өфөлә 3053 һуғыш ветераны йәшәй.

✓Медицина белгестәре белдереүенсә, Өфө халҡы кеҫә телефондарынан "Ашығыс ярҙам" хеҙмәте диспетчерына шылтыратыу ҡағиҙәләрен белмәй. Баш ҡалалағы кәрәҙле элемтә операторҙарының береһе лә "Ашығыс ярҙам"ды элеккесә 03 һаны буйынса саҡырыу мөмкинлеген бирмәй. "Ашығыс ярҙам" саҡырыу өсөн кеҫә телефондарынан ошо һандарҙы йыйырға кәрәк: Смартс - 03, 8347203, 030, 003; Мегафон - 030303, 003003; МТС - 03*, 030, 033; Билайн - 003; Сотел - 03 (Өфөлә генә).

✓Баш ҡала клиникаларының береһендә тиҙҙән өр-яңы хеҙмәт тәҡдим ителәсәк - унда ауырыуҙарҙы Ислам ҡағиҙәләре буйынса ҡабул итәсәктәр һәм дауалаясаҡтар. Клиникаға килгән мосолмандар өсөн йыуыныу, намаҙ уҡыу урындары ҡаралған. Ауырыуҙарға дарыуҙар билдәләгәндә составында спирт булған препараттарҙы башҡалары менән алыштырасаҡтар. Был клиникала ҡара әнис, ҡына, бал менән дауалау ысулдары киң ҡулланыласаҡ, тип көтөлә. Ислам ҡағиҙәләре буйынса эшләгән клиникала 16 эш урыны булдырылған. Яҡын киләсәктә ошондай клиникалар республиканың башҡа район-ҡалаларында ла ойоштороласаҡ.

*✔ Әүҙем йәмәғәтселәр стеланы үҙ проекты буйынса Салауат батырҙың ошо төбәктә тыуып үҫкән көрәштәштәре иҫтәлегенә Мәсетле районы етәкселеге ярҙамында ҡуйған.*



МИЛЛӘТ ҠОР ЙЫЯ

# ХӘТЕР ЯҢЫРТЫУ ҺӘМ...

## йәшәйешебеҙҙе заманса ҡороу тураһында

**Ошо көндәрҙә Мәсетле районы үҙәге Оло Ыҡтамаҡта Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты Советының күсмә ултырышы уҙғарылды. Ҡоролтай етәкселеге ойоштороған етди һөйләшеүҙә Өфөнән килгән ғалимдар, дәүләт эшмәкәрҙәре, журналистар, Ҡариҙел, Дыуан, Салауат, Мәсетле, Ҡыйғы, Балаҡатай райондары, Свердловск һәм Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайҙары вәкилдәре, урындарҙағы хакимиәт башлыҡтары урынбаҫарҙары һәм әүҙем йәмәғәтселәр ҡатнашты.**

Совет ултырышына йыйылған ҡунаҡтарҙы иң әүәл Оло Ыҡтамаҡҡа илткән юлдың уң яғындағы ҡайын урманы менән ҡапланған тау башына ҡуйылған стела янына алып барҙылар. Был төбәк 1773-1775 йылдарҙа батша карателдәре менән алышҡа йүнәлгән ихтилалсылар тупланған урын була. Әүҙем йәмәғәтселәр стеланы үҙ проекты буйынса Салауат батырҙың ошо төбәктә тыуып үҫкән көрәштәштәре иҫтәлегенә Мәсетле районы етәкселеге ярҙамында ҡуйған. Уның мәрмәр ташына Пугачев полковниктары Бәхтейәр Ҡанҡаев, Һөләймән Күсәкәйев, Ҡошсо олоҫо старшинаһы Илсеғол Этҡолов, Дыуан олоҫо старшинаһы Миҙәт Миндейәров, старшина Иҫәкәй Садыровтың исемдәре уйып яҙылған. Әлбиттә, тәбиғәт ҡосағында ошондай иҫтәлекле урын булдырыу тарихи ваҡиғаларға бай төбәк өсөн маҡтауға лайыҡ өлгө булып тора.

Ултырышта башлыса Башҡортостан Республикаһының тәбиғәт һәм тарихи ҡомартҡыларын һаҡлау, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәренең исемдәрен мәңгеләштереү тураһында һүҙ барһа ла, ағымдағы йылдың мөһим ижтимағи-сәйәси ваҡиғаларына әҙерләнеү мәсьәләләре, республикабыҙҙың төньяҡ-көнсығыш төбәгенә хас булған проблемалар ҙа күтәрелде.

Ҡоролтайҙың Башҡарма комитеты рәйесе Азамат Галин республикабыҙҙың байтаҡ ҡына төбәктәрендә, атап әйткәндә, Стәрлетамаҡта - Ҡаһым түрәгә, Көйөргәҙелә - Кинйә Арыҫлановҡа, Стәрлебашта - Тәтегәс бейгә, Бөрйәндә - Бабсаҡ бейгә, Ейәнсурала - Бикбау бейгә, Йылайырҙа - ете башҡорт ырыуы, Мәләүездә тамъян, ҡыпсаҡ һәм юрматы ырыуҙары хөрмәтенә ҡуйылған һәйкәлдәрҙең тарихи хәтеребеҙҙе яңыртыу йәһәтенән оло башланғысҡа тиң булыуы һәм артабан да ошо мөһим эште дауам итеү зарурлығы хаҡында билдерҙе. Ул III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек барышында урындарҙағы ҡоролтайҙар эшмәкәрлеген әүҙемләштереү, ҡоролтай делегаттарын һайлағанда иң эшмәкәр һәм әүҙем шәхестәребеҙҙе, айырыуса йәштәрҙе күберәк тәҡдим итеү кәрәклеген билдәләп үтте. Сығыштарҙа Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһына әҙерлек осоронда ауылдар тарихын, ғаилә шәжәрәләрен өйрәнеү, билдәле сәбәптәр arҡаһында үҙҙәренең милли сығышын оноҡҡан ҡанҡәрҙәштәребеҙ араһында аңлатыу эштәре алып барыу буйынса ла эшлекле тәҡдимдәр яңғыраны. Ултырышта ҡатнашыусылар академик Фәнил Фәйзуллиндың халҡыбыҙҙың тарихи ҡиммәттәре, БР Хөкүмәте ҡарамағындағы Архив эштәре идаралығы начальнигы урынбаҫары Илфат Ғәлләмовтың бала-ҡатай ырыуы ауылдары тарихы, "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе Риф Иҫәновтың төньяҡ-көнсығыш төбәктә тәбиғи һәм тарихи ҡомартҡыларҙы һаҡлау, Башҡарма комитет Советы ағзаһы Роберт Солтановтың традицион башҡорт сувенирҙарын етештереү мәсьәләләре буйынса сығыштарын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланы. Урындарҙағы ҡоролтай ағзалары йәмәғәт эштәре тороһо, яҡын киләсәккә ҡуйылған төп бурыстар хаҡында фекер алышһа, әүҙем йәмәғәтсе, яҙыусы һәм журналист Ризван Хажиев үҙ сығышында Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш төбәгенең тиҫтә йылдар дауамында хәл ителмәй килгән проблемалары хаҡында бик әсенеп һөйләне. Эйе, был төбәктә дәүләт ҡарамағындағы, кооператив һәм шәхси предприятиеларҙың үтә аҙ булыуы, ауыл хужалығын заманса ойоштороу һәм тергеҙеү эшенең ҡәнәғәтләнерлек кимәлдә алып барылмауы бер-береһенә бәйле ауылыҡтар тыуҙырып, халыҡтың күпләп сит-ят ерҙәргә китеүенә, мәктәптәрҙең ябылыуына килтереүен һәр кем яҡшы аңлай. Тап шуның өсөн Совет ултырышы ҡабул иткән ҡарарҙа ошо төбәктең урындағы хакимиәттәренә лә, йәмәғәт ойошмаларына ла тейешле әүҙемлек күрһәтеп, анығ эштәргә тотоноу зарурлығы хаҡында әйтелә.




Артур МӨХӘМӘҘИЕВ фотоһы.

Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.

ҺОРАУ - ЯУАП

## ҮҘ ФАЙҘАҺЫН ҠАЙЫРҺА...

**Ире - фермер, ҡатыны - ауыл хакимиәте башлығы, йүнләп эшләмәй, фәҡәт үҙ донъяһы, үҙ хужалығына файҙа ҡайыра. Хәтерем яңылышмаһа, ире йәки ҡатыны фермер булһа, уларға етәксе вазифа тейеш түгел, тигән закон бар ине, бугай, шуны аныҡлап бирһәгеҙ ине?**

- "Рәсәй Федерацияһында муниципаль хеҙмәт тураһында" 2007 йылдың 2 мартындағы Федераль закондың 13-сө статьяһы 5-се пунктындағы талапҡа ярашлы, муниципаль хеҙмәткәргә туғанлығы йәки башҡа төрлө ҡәрҙәшлек мөнәсәбәте булған һәм вазифалар береһе икенсеһенә буйһоноу һәм контроллек тәртибендә килгән осраҡта граждан муниципаль хеҙмәткә эшкә алынмай. Ошо уҡ Закондың 14-се статьяһында ҡаралыуынса, муниципаль хеҙмәткәргә эшкыуарлыҡ менән шөғөлләнеү рөхсәт ителмәй.

Һорау тексында телгә алынған осраҡ ғәмәлдәге законға ҡаршы килмәй, ләкин, әгәр ҙә муниципаль хеҙмәткәрҙең шәхси ҡыҙыҡһыныуы уның вазифа бурыстарын объектив башҡарыуына йоғонто яһай һәм хеҙмәктәрҙең шәхси мәнфәғәте менән башҡа граждандар, ойошмалар, йәмғиәттәр мәнфәғәте араһында ҡапма-ҡаршылыҡ һәм хатта зыян килеп тыуа икән, етәкселек (эш биреүсе)тарафынан был конфликтты бөтөрөү йәки мөнәсәбәттәр яйға һалынғанға тиклем әлеге хеҙмәткәр вазифаһынан ситләтелергә (эш хаҡы һаҡлана) мөмкин.

## ПАСПОРТЫНДЫ БИРМӘ!

**19 йәшлек ҡыҙым Өфөләге супермаркеттарҙың береһенә иртәнге сәғәт 8-гә стажировкаға еҙерелә. Бында уның паспортын залог итеп алалар һәм уны киске сәғәт 10-ға тиклем кассаға ултыртып ҡуялар. Кис администратор 80 мең төшөмдән 180 һум етмәүе хаҡында әйтә һәм уны ҡыҙымдан түләтә. Был дөрөҫмө?**

- Эшкә килгәс, (һеҙҙең осраҡта - "кассаға ултырыу") яҙма рәүештә хеҙмәт мөнәсәбәттәрен нығытмайынса тороп, эште башламаҫҡа кәңәш ителә. Ғәмәлдәге хеҙмәт законында "стажировка" тигән төшөнсә юҡ. Хеҙмәткәргә эшкә өйрәнеү өсөн бер аҙ ваҡыт кәрәк булғанда, уның эш биреүсе менән мөнәсәбәттәре уҡыусы (өйрәнсек) килешеүе (РФ Хеҙмәт кодексы, 32-се бүлек) сиктәрендә көйләнә. Хеҙмәткәрҙең тапшырылған эшкә һәләтен тикшереү маҡсатында эш биреүсе уға һынау ваҡыты билдыырға тейеш. "Кассир" һөнәре буйынса эш тулы матди яуаплылыҡ йөкмәтелгән һөнәрҙәр (эш) иҫәбенә инә һәм, әгәр ҙә хеҙмәткәр менән яҙма килешеү төҙөлгән хәлдә, эш биреүсе хеҙмәткәрҙән килтерелгән матди зыян өсөн түләүҙе талап итә ала. Ләкин был саралаһың үҙ тәртибе бар (РФ Хеҙмәт кодексының 247-248-се статьялары): эш биреүсе килтерелгән матди зыяндың сәбәптәрен һәм күләмен асыҡлау өсөн тикшереү үткәрергә, хеҙмәткәрҙән яҙма аңлатма алырға, сумманы тотоп ҡалыу ауырында бойороҡ яҙырға һәм уның менән хеҙмәткәрҙе таныштырырға тейеш. Аҡса тотоп ҡалыу тураһында бойороҡ тейешле сумманың күләмен билдәләгәндән һуң бер айҙан да ҡалмайынса сығарылырға тейеш.

Ә бына паспортты "аманат" итеп алыу, бигерәк тә кешене эшкә ҡабул иткәндә - бер ниндәй закон сиктәренә һыя торған ҡылыҡ түгел, был - административ хоҡуҡ боҙоу. Уның өсөн эске эштәр органдары тарафынан яза бирелеүе ихтимал.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Хроник ҡурылдайҙан (бронхит) дауаланыу өсөн

❖ 2-шәр өлөш үгәй инә үләне һәм аҡ сәскәгә 1 өлөш мәтрүшкә ҡушырға ла, айырым һауытта һаҡларға. Ошо ҡатнашманан 2 ҡалаҡ ваҡланған үлән алып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 5 сәғәт термоста торорға. Ашар алдынан көнөнә 3 тапҡыр яртышар стакан йылы көйөнсә эсергә.

❖ 4 өлөш һаҙанаҡ (багульник) үләне, 2 өлөш мәтрүшкә, 1 өлөш ҡайын бөрөһө, 1 өлөш кесерткән япрағы алабыҙ. 2 ҡалаҡ ваҡланған үләнгә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға. Таҫтамалға төрөп, 30 минут һыуытырға. Көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшөн эсергә.

❖ 1 стакан бал, 1 ҡалаҡ аҡ май, 2-шәр ҡалаҡ ҡырылған торма һәм һарымһаҡты ҡушып, ашар алдынан 1 сәғәт алда 1 ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ Ҡурылдай менән сирләгәндә тауыш юғалһа: 1 ҡалаҡ киптерелгән ер еләге япраҡтары һәм емешенә 1 стакан һалҡын һыу ҡойорға һәм ҡайнатып алырға. Көнөнә 1-әр стаканлап 3-4 тапҡыр эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ бәпкә үләненә (спорыш) 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5-10 минут ҡайнатҡас, 2 сәғәт төнәтергә. 1-әр ҡалаҡлап көнөнә3-4 тапҡыр эсергә.

## Ангинанан дауа

❖ 1 стакан самаһы ҡырылған сөгөлдөргә 1 ҡалаҡ аш һеркәһе ҡойоп, һутын һығып алырға. Тамаҡты сайҡағанда 1-2 тамсыһын эсергә. Хроник ангинаны ла дауаларға мөмкин.

❖ 1 ҡалаҡ календула сәскәләренә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10-15 минут төнәтергә. Тамаҡты сайҡау өсөн ҡулланырға.

## Хәлһеҙлектән

Ваҡланған 2 балғалаҡ әлморон емешенә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, термоста төнгөләккә ҡалдырырға. Иртән һөҙөп, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Ашарҙан 15-20 минут алда ярты стакан эсергә.

## Йоҡлай алмаһағыҙ

1 ҡалаҡ балды 1 стакан йылы һыуҙа (һөттә булһа, тағы ла яҡшыраҡ) иретеп, йоҡлар алдынан 1-2 сәғәт алда эсергә.




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Табын ҡағиҙәләре

● Мөмкин булһа, үҙегеҙгә яҡын кешеләрҙең яндарына ултырығыҙ. Мәжлес һәм ашау ҡағиҙәләрен камил үтәгеҙ. Ни ҡәҙәре оҡшамаған аш килтерһәләр ҙә, яратмағанығыҙҙы белдермәгеҙ. Ризыҡтары матур булманы, тип бәхәсләшмәгеҙ, ашарға теләгәндәрен ашағыҙ, теләмәгәндәрен әҙәпле генә ҡайтарығыҙ. Бүлеп алмағыҙ.

● Аш тамамланғас, ҡулдарығыҙҙы йыуып, рәхмәт әйтеп, әҙәпле хушлашығыҙ.

● Мәжлескә барырға ҡаршылыҡ килеп сыҡһа, бара алмауығыҙҙы белдереп, хәбәр ебәрегеҙ.

● Бер кешегә барғанда, икенсе берәүҙең мәжлесе, аштарының ләззәте булмауы йәки башҡа ғәйептәре булыуы тураһында һөйләмәгеҙ.

● Саҡырмаған кешеләрҙең мәжлестәренә бармағыҙ.

● Аш һәм туй мәжлестәре ойоштороғанда, башҡаларҙан көнләшеп, хәлегеҙҙән артыҡ мал исраф итмәгеҙ.

● Ваҡыт алтын кеүек ҡәҙерле булғаны өсөн бер сәғәттән артыҡ ваҡыт исраф итергә кәрәк мәжлестәргә бармағыҙ һәм кешеләрҙең ғүмерен исраф итәсәк мәжлестәрҙе лә йыймағыҙ.

### Осрашыу

● Ҡарындаш һәм яҡын дуҫтарығыҙ килгәндә, асыҡ йөҙ менән ҡаршы алып, күрешегеҙ, лайыҡ булған урындарға ултыртып, хәлдәрен һорағыҙ, ҡайтырға сыҡҡанда хушлашып ҡалығыҙ. Әгәр килеүсе оло кеше булһа, хөрмәт менән рәхмәт әйтеп ҡалығыҙ.

● Осрашыу өсөн килгән кешеләргә, "йоҡлай" йәки "өйҙә юҡ" тип әйттермәйенсә, мөмкин булһа, үҙегеҙ ҡаршы алырға тырышығыҙ.

● Килеп киткән кешеләргә үҙегеҙ ҙә барып китегеҙ.

● Яҙыу йәки уҡыу менән мәшғүл булған ваҡытта һеҙгә килгән кешеләргә: "Һеҙгә ауыр булмаһа, эшемде тамамлар инем", - тип рөхсәт һорап, эшегеҙҙе бөтөрөгөҙ һәм һуңынан улар менән мәшғүл булығыҙ.

● Йөҙ-ҡулығыҙ туҙанлы, кейемегеҙ керле булһа йәки ямғыр һәм эш өсөн махсус кейем менән һис кемгә осрашыуға бармағыҙ һәм килгәндәрҙе ҡаршы алырға сыҡмағыҙ.

● Осрашыуға барғанда, өй хужаһына икеөс тапҡыр килгәнегеҙҙе белдерегеҙ, яуап булмаһа, ҡайтығыҙ.

● Ҡалала йәшәүселәргә барған саҡта ишектәренә ҡуйылған махсус әйбер менән, араларында бер аҙ көтөп, өс мәртәбә хәбәр бирегеҙ. Әммә тәҙрә тураларына килеп йәки бер ерҙә көтөп тик тормағыҙ.

● Барған кеше өйҙә юҡ, тип хәбәр бирелһә, килгәнегеҙҙе белдереү өсөн визиткағыҙҙы биреп ҡалдырығыҙ.

● Барған ерҙә ишек асыҡ булһа ла, хәбәр итмәйенсә кермәгеҙ.

● Ҡабул иткән кешегә асыҡ йөҙ менән лайыҡ рәүештә сәләм бирегеҙ. Әгәр ул бер кеше менән һөйләшкән йәки берәй эш менән мәшғүл булһа, эше тамамланғансы көтөп ултырып тороғоҙ, һуңынан ҡыҫҡа ғына йомошоғоҙ тураһында бәйән итегеҙ.

---

ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ

**Мәрйәм Бураҡаеваның "Тәнәйҙәргә тәғәйен тәрбиә" рубрикаһында баҫылған мәҡәләләрен уҡып барам. Уҡыйым да, үҙемдең бала тәрбиәләү алымдарымды иҫкә төшөрәм.**




# БЕҘҘЕҢ ҺҮҘҘӘН...

## бала һығымта яһай

Әсәйем мине лә сәңгелдәк йырҙары йырлап бөүеткәндер, тип уйлайым. Тик мин уларҙы хәтерләмәйем. Үҙемде тоя-белә башлағанда балалар йортонда инем инде. Бөтәбеҙ ҙә Өфөнөң 1-се балалар йортон үҙ өйөбөҙ тип иҫәпләп, унда эшләгән апайҙарҙы яратып, бәхет-шатлыҡҡа төрөнөп үҫтек.

Тик бына үҙем әсәй булғас, тәүҙә ҡаушап ҡалдым. Мине бит берәү ҙә әсәй булырға өйрәтмәне. Әсәй өлгөһөн дә күреп үҫеү яҙманы. Яҡынтирәлә кәңәш бирерҙәй ҡатын-ҡыҙ ҙа юҡ. Ә шулай ҙа әкренләп өйрәнеп киттем. Балам үҫә төшкәс, ҡәйнәм ауылдан ҡунаҡҡа килеп йөрөй башланы. Уның менән балам менән мөнәсәбәттәрен ҡыҙығып күҙәтәм дә, үҙемсә һығымталар яһайым.

Айгөлгә ул саҡта өс-дүрт йәш тирәһе булғандыр. Бер саҡ ҡәйнәм алып килгән күстәнәстәрен өҫтәлгә теҙгән дә: "Ә быныһы ейәнсәрем Айгөлгә генә", - тип еләк ҡайнатмаһын сығарып ултыртты. Ярты литрлыҡ һауытҡа һалынған балды ла, ейәнсәремә, тине. Мин: "Рәхмәт, әсәй!" - тип тик торҙом.

Был ваҡиға онотолоп та бөткәйне инде. Ҡыш ҡыҙыма һалҡын тейҙе лә, балалар баҡсаһына алып барманым. Төшкө ашты ашағас: "Әйҙә, ятып саҡ ҡына ял итәйек", - тип, баламды йоҡлатырға булдым. Әкиәт һөйләп ята торғас, үҙемде лә йоҡо баҫып, йоҡлап киткәнмен. "Миңә бер үҙемә күңелһеҙ!" - тигән тауышҡа уянып киттем дә: "Ярай, йоҡламаһаң, әйҙә, өләсәйең алып килгән бал менән сәй эсәйек", - тинем. Икмәккә май, өҫтөнә бал һылап, балама тотторҙом да, үҙем дә ашарға итһәм, ҡыҙым өләсәһенең һүҙҙәрен иҫенә төшөрөп: "Бал бит минеке генә!"- тине. Аптыраным. Ниндәй һүҙҙәр табып, был хәлдән сығырға икәнен дә белмәйем. Тамағыма төйөлгән төйөрҙө йоттом да, фатирыбыҙҙан дөйөм коридорға сығып, ишекте ҡыҫып ҡуйҙым. Балам сәйен эсте лә, мине эҙләй башланы, тапмағас, ҡысҡырып илап ебәрҙе. Мин тиҙ генә фатирға индем дә, уны күтәреп алдым: "Әсәйең юҡ булдымы, балам? Бына шулай, әгәр ял итмәһә, әсәйең юҡ булыр ҙа ҡуйыр шул", - тип, ҡыҙымды иҙәнгә баҫтырҙым. Ә ул: "Әсәй, теләһәң, ятып ял ит, ә мин ҡамасауламай ғына янында ултырып торормон, баллап сәй эс", - тине.

Был ваҡиғаны иҫемә төшөрәм дә, балама ҡатыраҡ ҡағылманыммы икән, тип уйлайым. Тик бынан һуң, бөтәһе лә тик Айгөл теләгәнсә генә, Айгөл өсөн генә, тигән уй-фекер беҙҙең арала булманы, уның хаҡһыҙлығын әрләмәй, өгөт-нәсихәт уҡымай ғына аңлатҡанмындыр, тим.

Ҡәйнәм тағы бер һабаҡ бирҙе. Ул: "Айгөләм, мин һине ҡарайым, үҫеп еткәс, һин мине ҡараһыңмы?" - тип һөйә лә, һуңынан үҙ алдына: "Һин үҫеп еткәнсе, мин үлермен инде", - тип көрһөнөп ҡуя. Бер саҡ ошо һорауына ейәнсәре вайымһыҙ ғына тауыш менән: "Мин үҫкәнсе, һин үләһең бит", - тип яуап бирҙе. "Ниңә балаға ундай һүҙҙәр өйрәтәһең", - тип, ҡәйнәм миңә асыуланды. Ҡыҙым миңә ярҙамға килеп: "Үҙең шулай тип әйтәһең дә инде", - тине. Бынан шундай һығымта яһарға була: бала алдында һәр һүҙҙе уйлап һөйләргә кәрәк шул.

Балам уҡырға төшкәс, күршем уны улының класына күсерергә һораны. Уның улы шаян, иғтибарһыҙыраҡ, минеке тыныс, тырыш. Етмәһә, Андрейҙы - йәш, Айгөлдө оло йәштәге уҡытыусы уҡыта. Тәүҙә ҡыҙым менән кәңәшләшәйем, тип, унан һорамам: "Әсәй, мин оло йәштәге апай, өләсәйҙәрҙе яратам, күсермә мине", - тине. Оло йәштәгеләрҙе яратыу, хөрмәт итеү ҡыҙымдың өләсәһен яратыуҙан киләләр. Мин бер ҡасан да: "Өләсәйең дөрөҫ һөйләмәй", - тимәнем, үҫә-бара уның яңылыш әйткән һүҙҙәрен ҡыҙым аҡылы менән үҙе аңланы.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

---

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# ШӨКӨР ИТ

**Беҙ көндәлек ығы-зығы менән йәшәйбеҙ. Булғаны менән ҡәнәғәтләнә белмәйбеҙ, беҙгә һәр ваҡыт нимәләр етмәй. Үҙебеҙҙең проблемаларҙы сисеү менән мәшғүл булып, беҙ иң мөһиме - Аллаһы Тәғәләгә шөкөр итергә онотабыҙ. Әйләнәтирәбеҙҙә булып торған яҡшылыҡтарҙы беҙ, булырға тейеш, тигән кеүек ҡабул итәбеҙ. Ә Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө рәхмәттәр, ниғмәттәр менән бүләкләгән. Һәм шуға төшөнөү өсөн беҙгә ишетеү, күреү һәләте һәм йөрәк биргән.**

Ҡөрьәндә, кешеләр Аллаһы Тәғәләнең ниғмәттәрен күрһендәр, төшөнһөндәр һәм уның тураһында онотмаһындар, тип, бер нисә тапҡыр әйтелә. Аллаһы Тәғәләнең ниғмәте һәр кешегә, бөтә кешелеккә лә бирелгән. Ҡайһы саҡ үҙ-үҙеңә: "Туҡта, ҡабаланма! Ҡояшҡа, айға, күк йөҙөнә, утҡа һәм һыуға ҡара, үҙеңдең ғаиләңә, тәнеңә иғтибар ит, иҫ киткес әйберҙәргә баһа бир! Үҙең эйә булған, һине уратып алған бөтә яҡшылыҡтарға баһа бир һәм Аллаһы Тәғәләгә шөкөр ит, уға маҡтауҙар ебәр! Был мөғжизәләрҙең барыһын да Ул яралтҡан. Бөтә нәмә кешегә үҙе яулап алған кеүек тойолһа ла, асылында, барыһын да Аллаһы Тәғәлә биргән. Бөтәһе лә уның ихтыяры һәм тәҡдире менән булдырыла", - тиһең. Изге Ҡөрьән юлдарын уҡып, бөтә барлыҡтарҙы яралтҡан Аллаһы Тәғәләгә һәр ваҡыт маҡтауҙар әйтеп торорға кәрәк икәнлекте аңлайһың. "Нур" сүрәһендә: "Күктәрҙә һәм Ерҙә йәшәгәндәр менән осар ҡоштарҙың ҡанат ҡаға-ҡаға Аллаһты маҡтап һайрағанын ишетмәйһеңме ни, күрмәйһеңме ни? Һәр берehе үҙ доғаһын һәм тәсбихен яҡшы өйрәнгән. Аллаһ уларҙың нимә ҡылғанын белеп тора", - тип яҙылған.

Беҙҙең Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәтебеҙҙең нигеҙен "Әл-Фатиха" - Ҡөрьәндең беренсе сүрәһе тәшкил итергә тейеш. Уның менән Аллаһы Тәғәләнең китабы ғына түгел, ә һәр намаҙ башлана, нәҡ уны беҙ көнөнә бер нисә тапҡыр ҡабатлайбыҙ. "Әл-Фатиха" Мәрхәмәтле һәм рәхимле Аллаһҡа маҡтауҙар менән башланып китә.

Аллаһы Тәғәлә беҙгә үҙе яралтҡан барлыҡтары, эштәре тураһында уйланырға, һүҙе тураһында тәрәндән төшөнөргә әмер итә. Ҡөрьәндә әйтелә: "Әй, иманлы халыҡ, Аллаһты һәр ваҡыт иҫкә алығыҙ. Уны иртәкис (маҡтап) тәсбих тартығыҙ. Һеҙҙе ҡараңғылыҡтан яҡтылыҡҡа сығарыу өсөн рәхмәтен, мәрхәмәтен һәм фәрештәләрен күндергән - Улдыр. Аллаһ мөьминдәргә сикһеҙ рәхмәтле" ("Әхзәб", 41-43). Әгәр ҙә Аллаһты аңлау һәм маҡтау беҙҙең аңыбыҙҙа һәр ваҡыт типһә, беҙҙең уйҙарыбыҙ һәм ниәттәребеҙ таҙараҡ, һүҙҙәребеҙ ихласыраҡ, әһәмиәтлерәк, ә беҙҙең изге эштәребеҙ унышлыраҡ булыр.

Аллаһы Тәғәләне маҡтап, кеше Уның менән бәйләнеш булдыра: иманлыларға Аллаһы Тәғәләнең рәхмәтен, шифаһын алыу, ауыр хәлдәрҙе сисеү юлдары асыла. Аллаһы Тәғәләне маҡтап, кеше, гүйә, Уның көсөн һәм һөйөүен яҡынайта. Беҙ Уны ҙур ышаныс менән маҡтаған саҡта, Аллаһтың исемдәренең сифаты беҙҙең тормошобоҙҙа сағыла. Өҫтәүенә, заман медицинаһы тикшеренеүҙәре билдәләүенсә, Маҡтауҙар, Бөйөкләү, Шөкөр итеүҙәр дауалау көсөнә эйә, улар кешене һауыҡтыра. Шулай уҡ был - стресстан ҡотолоуҙың иң яҡшы сараһы.

✓ *Минзәлә өйәҙендә ауылдарҙың дүрттән бер өлөшөнән аҙ ғына күберәге саф башҡорт ауылы булһа, башҡорт, татар, мишәр, типтәрҙәр ҡатнашып йәшәгән ауылдар 73,4% тәшкил итә.*



АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!



# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?

Көнбайыш Башҡортостанды төйәк итеүселәрҙең этник сығышы тураһында байтаҡ фараздар бар. Шуларҙың береһенә ярашлы, 1897 йылғы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбе һөҙөмтәләре буйынса Бөгөлмә, Минзәлә, Алабуға һәм Сарапул өйәҙ-ҙәрендә йәшәгән 200 мең башҡорттоң ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә (1897-1920 йй.) үҙенең мили үҙаңын үҙгәртеп, татарҙар составына инеп китеүе уларҙың элекке замандарҙан бирле башҡорт этносына ҡарамауын, башҡорт та, татар ҙа булмайынса, ниндәйҙер бер күсмә төркөм булыуын аңлата. Башҡортостандың көнбайыш райондарының төрки халҡы башҡорт булмаған, тип иҫәпләй ошо фараз яҡлылар. Шул уҡ ваҡытта улар ошо халыҡтың башҡорт сығышлы булыу мөмкинлеген бөтөнләйгә инҡар итә алмай, әммә ошо мәсьәләне бына нисек хәл итергә теләй: татар мөхитендә башҡорттар "тулыһынса ассимиляция"ға бирелгәс, уларҙың татар этносына ҡарауын танып, башҡорттар иҫәбенән сығарырға кәрәк, ти улар.

Икенсе берәүҙәр башҡорттарҙың ҡасандыр Көнбайыш Башҡортостандың тәү халҡы булыуын раҫлай. Әммә XVI быуатта Иван Грозный Ҡаҙанды яулап алғас, татарҙар күпләп Башҡортостанға күсенә башлай. Уның көнбайыш яғында ныҡ татарлашҡан башҡорт төркөмө һәм башҡорт йоғонтоһона эләккән татар типтәрҙәре төркөмө барлыҡҡа килә. Өсөнсөләр мәсьәләне ябай ғына хәл итә. Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуынан һуң төп халыҡ үҙ ерҙәрен ҡалдырып, төбәктең көньяҡ һәм көнсығыш тарафтарына күсеп китә. Волга буйынан килгән татар мигранттары элек башҡорттарҙыҡы булып, буш ҡалған ерҙәрҙе төйәк иткән, имеш. Ошо ерҙәргә килеп сыҡҡан күскенселәр ни эшләптер "башҡорт" булып яҙыла. Йәнәһе, бына ошо рәүешле Башҡортостандың көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш, хатта көньяҡ-көнбайыш төбәктәрендә башҡорт тип йөрөтөлгән ауылдар барлыҡҡа килә.

Көнбайыш Башҡортостан халҡының килеп сығышы тураһында үрҙә һанап үтелгән фараздар тарихи сығанаҡтарға тура килмәй. Башҡорттар, хәҙерге заманға тиклем үҙҙәре йәшәп килгән бик ҙур аҫаба ерҙәрҙең хужалары булараҡ, быуаттар төпкөлөнән бирле Көнбайыш Башҡортостандың да автохтон халҡын тәшкил иткән. V, VII, VIII, X ревизиялар, 1917 йылғы Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы һәм ер иҫәбен алыу мәғлүмәттәре ошо фекерҙең дөрөҫлөгөн тулыһынса раҫлай.

Башҡортостанға урыҫ булмаған крәҫтиәндәр күсеп килә башлағанға тиклем бында йәшәүсе төп халыҡ ауылдары бер милләтле булған. XVIII быуатта төбәктең татар, мишәр, мари, сыуаш, удмурт крәҫтиәндәре менән киң колонизацияланыуы һөҙөмтәһендә башҡорт ауылдары этник яҡтан ҡатнаш була башлай, быны 1795 йылғы ревизия материалдары яҡшы күрһәтә.

Бөгөлмә өйәҙендә 29 ауылдың 26-һы (89,7%), Минзәләлә - 150 ауылдың 88-е (58,7%), Бәләбәйҙә - 186 ауылдың 103-ө (54,4%), Быҙаулыҡта - 4 ауылдың 2-һе (50%), Бөрөлә - 182 ауылдың 65-е (35,7%), Өфө өйәҙендә - 84 ауылдың 27-һе (32,1%) ҡатнаш булып, башҡа өйәҙҙәрҙә ундай ауылдар бик аҙ - 6,6-13,6 процент ҡына тәшкил итә. Ҡатнаш ауылдар өлөшө артабан да арта бара.

VII ревизия (1816 йыл) һөҙөмтәләре буйынса Бөгөлмә өйәҙендә тик башҡорттар ғына йәшәгән ауылдар ҡалмай, бөтә ауылдар ҙа ҡатнаш булып китә. Минзәлә өйәҙендә ауылдарҙың дүрттән бер өлөшөнән аҙ ғына күберәге саф башҡорт ауылы булһа, башҡорт, татар, мишәр, типтәрҙәр ҡатнашып йәшәгән ауылдар 73,4% тәшкил итә. Бындай нисбәт, әлбиттә, башҡорттарҙың был төркөмөнөң татарҙар тарафынан ассимиляцияланыуында хәл иткес роль уйнай.

1841-1842 йылдарҙа 13 башҡорт һәм 5 мишәр кантоны начальниктары тарафынан (Ырымбур ҡаҙна палатаһы талабы буйынса, күрәһең) төҙөлгән 18 ведомоста башҡорт, типтәр һәм мишәрҙәрҙең социаль-иҡтисади хәлен сағылдырған төрлө мәғлүмәттәр тупланған. Ведомостар 1834 йылғы VIII ревизия буйынса ауылдар һанын һәм ошо ике төркөмгә ҡараған халыҡ иҫәбен күрһәтә. Улар үҙенә күрә уникаль сығанаҡ булып, кантон идаралығы осоронда башҡорт һәм мишәрҙәрҙең ер биләүе һәм файҙаланыуын, уларҙың хужалыҡтарының үҙенсәлектәрен һәм ижтимағи мөнәсәбәттәрен өйрәнеү мөмкинлеген бирә.

Башҡортостан тарихының кантонлыҡ осорон өйрәнеүсе тикшеренеүселәр йыш ҡына кантондарҙың нумерацияһын күрһәткәндә хата ебәрә. 1798 -1803 йылдарҙа 11 башҡорт һәм 5 мишәр кантоны була. 1-се кантон Пермь губернаһының Пермь һәм Уса, 2-се кантон - Екатеринбург һәм Шадринск өйәҙҙәренә, ҡалғандары Ырымбур губернаһына ҡарай. 3-сө кантон Троицк өйәҙендә, 4-се - Силәбе, 5-се - Бөрө, 6-сы - Верхнеуральск, 7-се - Өфө, 8-се - Стәрлетамаҡ, 9-сы - Ырымбур, 10-сы - Бөгөлмә, 11-се Минзәлә өйәҙендә урынлаша. 1803 йылда Шадринск өйәҙе башҡорттарынан айырым административ берәмек сифатында тағы ла бер кантон төҙөлә. 1847 йылдан 1855 йылға тиклем 13 башҡорт, 4 мишәр кантоны була. 1855 йылдан 1863 йылға тиклем Башҡорт ғәскәренә типтәр һәм бобылдәр ҡушыла, кантондар һаны 28-гә етә. 1863-1865 йылдарҙа кантондар һаны яңынан 11-гә тиклем ҡыҫҡартыла.

1865 йылда башҡорттар һәм припущенниктар ғәскәри сословиенан сығарылып, гражданлыҡ ведомствоһы ҡарамағына күсерелә. Улар менән губерна һәм өйәҙҙәрҙең крәҫтиән эштәре буйынса присутствиелары һәм мировой аралашсылар (посредниктар) идаралығы эш итә. Кантон идаралығының бөтөрөлөүе башҡорттарҙы һәм припущенниктарҙы натураль хеҙмәттән һәм хакимиәттең көндәлек күҙәтеүенән азат итеп, уларҙың хужалыҡ итеү башланғыстарын "бәйҙән" ысҡындыра.

Башҡортостан тарихының ошо осорон объектив өйрәнеү йәһәтенән күрһәтелгән документтарҙың ғилми әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Ведомостарҙа һәр кантонда һәм өйәҙҙә нисә башҡорт һәм мишәр ауылы булыуы хаҡында мәғлүмәттәр бар. Ҡыҙыҡһынған кеше уларҙан ауылдарҙағы, йорттарҙағы (юрта - ауылдар төркөмө), өйәҙ һәм кантондарҙағы ғына түгел, ә һәр түбәгә һәм олоҫҡа ҡараған кеше иҫәбен таба ала. Ведомостар ер биләмәләре буйынса һәр ауылдың ҡайһы түбәгә һәм олоҫҡа ҡарағанын күрһәтә. Уларҙа ауыл кешеләренең ергә мөнәсәбәте - аҫаба, һатып алынған, ҡаҙнаға ҡарағанында йәки ҡуртымға алынған ерҙә йәшәүе теркәлгән, шөғөлдәре күрһәтелгән. Ведомостар буйынса мишәр ауылдарының барлыҡҡа килеү ваҡытын билдәләргә була.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

### Башҡортостан кантондарында 1850 йылғы IX ревизия буйынса халыҡ иҫәбе:

| Яңы кантондар № | Элекке кантондар № | Өйәҙҙәр | 1850 й. IX ревизия буйынса яңы кантондарҙа халыҡ иҫәбе | | | | Кантон квартиралары |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | | Башҡорттар | Мишәрҙәр | Типтәрҙәр | Бөтәһе | |
| 1 хеҙм. | 9-ның өл. | Быҙаулыҡ | 23585 | 710 | 1599 | 25894 | Яманғол |
| 2 хеҙм. | 9 | Ырымбур | 25379 | - | - | 25379 | Сәйеткол |
| 3 хеҙм. | 9 | Ырымбур | 22070 | - | - | 22070 | Ейәнсура |
| 4 хеҙм. | 6 | Верхнеуральск | 23783 | - | - | 23783 | Юлдыбай |
| 5 хеҙм. | 6 | Верхнеуральск | 24501 | - | 130 | 24631 | Темәс |
| 6 хеҙм. | 6 | Верхнеуральск | 24254 | - | 101 | 24354 | Сермән |
| 7 | 4 | Троицк | 7332 | 1210 | 9210 | 17752 | Туңғатар |
| 8 | 5,6, 2-нең өлөшө | Өфө, Троицк, Красноуфимск | 28379 | 7004 | 11369 | 46752 | Т. Ҡыйғы |
| 9 | 6 | Силәбе | 17827 | 971 | - | 18798 | Мәтәле |
| 10 | 6 | Силәбе | 12913 | 5785 | 206 | 18904 | Атйетәр |
| 11 | 2 - 3-ң өл. | Екатеринбург Шадринск | 12472 | 12245 | - | 24717 | Һары |
| 12 | 1 | Уса, Пермь | 17029 | - | 980 | 18009 | Елпачиха |
| 13 | 10 | Бөрө | 14334 | 5227 | 23699 | 45889 | Байғужа |
| 14 | 10 | Бөрө | 17963 | 113 | 11001 | 29087 | Ваныш- |
| 15 | 10 | Бөрө | 13404 | 14059 | 21385 | 48848 | Әсән |
| 16 | 10 | Бөрө | 14580 | 6019 | 16615 | 37224 | |
| 17 | 11-нең өл. | Алабуға, Сарапул | 5176 | - | 7088 | 12265 | Салауыш Мәстәй |
| 18 | 11 | Минзәлә | 31479 | 506 | 16271 | 48256 | Нурҡай |
| 19 | 11 | Минзәлә | 16169 | 413 | 12968 | 28849 | И. Дөмәй |
| 20 | 12 | Бәләбәй | 11872 | 2461 | 23526 | 37859 | Төпкилде |
| 21 | 12 | Бәләбәй | 17233 | 4565 | 21915 | 43713 | Себенле |
| 22 | 12 | Бәләбәй | 18840 | 9925 | 7735 | 36500 | |
| 23 | 12-нең өл. 9-ның өл. | Бөгөлмә, Боғорослан Быҙаулыҡ | 14506 | 13 | 30577 | 45096 | Ҡыҙылъяр |
| 24 | 8 | Өфө | 5865 | 22311 | 8426 | 36632 | Ғүмәр |
| 25 | 8 | Өфө | 7235 | 6747 | 12531 | 27513 | Ҡабаҡ |
| 26 хеҙм. | 7 | Стәрлетамаҡ | 10302 | 6527 | 9224 | 26053 | Я. Ҡарамалы |
| 27 хеҙм. | 7 | Стәрлетамаҡ | 18105 | 743 | 5076 | 23924 | Усман |
| 28 хеҙм. | 7 | Стәрлетамаҡ | 22739 | 3011 | 334 | 27084 | Сабаш |
| **Бөтәһе** | | | **480317** | **110595** | **260975** | **851887** | |

✓ *Беҙ - бәйғәмбәрле милләт, шуға күрә беҙ юҡ-барға сәбәләнергә, ваҡланырға түгел, үҙ бәҫебеҙҙе үҙебеҙ белеп, Аллаһы Тәғәлә хозурында лайыҡлы йәшәргә тейешбеҙ.*

# БЕҘ – БӘЙҒӘМБӘРЛЕ шуға үҙ бәҫебеҙҙе

(Аҙағы. Башы 1-се биттә).

## Исемемдең мәғәнәһе

Донъяға тыуғас та, аҙаҡ та туҡтауһыҙ илағанмын. Миңә Әхмәр исемен һайлап ҡушыусы Халис ҡартатайымдың бер туған ҡустыһы Мөхлис олатай юҡҡа ғына ошо исемгә туҡталмағандыр, тием. Әхмәр ғәрәпсәнән "ҡыҙыл" тигәнде аңлата. Ә ҡыҙылды нимә өсөн тағалар? Эйе, күҙ тейеүҙән һаҡлар-аралар өсөн. Бындай ғилемде ҡайҙан алған һуң Мөхлис олатай? Әлбиттә, үҙенең атай-олатайҙарынан. Халис ҡартатайым менән Мөхлис олатайымдың атаһы Суфыйййән ҡартатай тәриҡәт юлындағы хәҙрәт булған. Ул ике тапҡыр хажға барған. Беҙҙең нәҫелдән икенсе булып былтыр атайым хажға барып ҡайтты.

Минең яҙышып китеремде иң беренсе булып әйтеүсе кеше Мөжәүир хәҙрәт Сиражетдинов булған. Әйткәндәй, уның тыуған ауылы Манһыр, тарихсы Әнүәр Әсфәндийәров мәғлүмәте буйынса, беҙҙең Буранбайҙан айырылып сыҡҡан. Мөжәүир олатайға мине әлеге лә баяғы илауым арҡаһында алып барғандар. Әсәйем мәрхүмә һөйләүенсә, мин өс көн, өс төн буйы тыйғыһыҙ булып илап, инде тын ала алмаҫ хәлгә етеп, тәнем күгәрә башлағас, Мөжәүир олатайға күрһәтергә булғандар. Инде үлдем тигән ерҙән. Олатай мине өшкөргән дә: "Был балағыҙҙан ғалим йә шағир сыға. Күҙ менән ҡаш араһында булһын..." - тигән. Ошо һүҙ Тайфа ҡарсәйемә етә ҡалғандыр инде, ул мине ғаиләбеҙҙәге ун бер бала араһынан айырыңҡырап ҡараны, баҡты. Күңеле әкиәттәр, йырҙар, бәйеттәр, хикәйәттәр менән лыҡа тулы хазина ине. Мине елкәһенә атландырып алыр ине лә, урман-ҡырҙарға алып китер, үҙе еләк, ҡарағат, сейә тирер, бер туҡтауһыҙ йырлар, әкиәт, бәйет, хикәйәт һөйләр ине. Миңә шулар йоғоп ҡалғандыр инде...

## Шәжәрәләрҙең осо...

Әнүәр Әсфәндийәров төҙөгән шәжәрә буйынса ("Буранбайҙың яҙған хатын уҡып...", "Йәшлек" гәзите. 12-се һан, 2 февраль. 2002 йыл) беҙгә фамилия биреүсе Үтәбай ҡартатай 1785 йылда тыуған. Үтәбайҙың улы - Сәғәҙей, артабан - Суфыйййән - Халис - Ғүмәр һәм мин. Шәжәрә буйынса Үтәбайҙың төрлө әсәләрҙән Йосоп (1767) һәм Буранбай (Буранбай сәсән) - (1765) атлы ағалары булған. Уларҙың аталары Ҡотдос, Ҡотдостоң атаһы Һөйөндөк. Һөйөндөк ҡартатайҙың тағы бер улының исеме Юныс, Юныстың Аҫыл (минең гәзиттәге Һөйөндөк Аҫылов псевдонимым ошонан алынды) һәм Юлан атлы уғландары булған. Әйткәндәй, Аҫыл олатай хәҙерге район үҙәгебеҙ урынындағы Аҫыл ауылында йәшәгән һәм шул нигеҙҙә Баймаҡ ҡалаһы барлыҡҡа килгән.

Һөйөндөк ҡартатайҙың был шәжәрәгә ни сәбәптәндер инмәй ҡалған тағы Әликәс атлы улы булған. Беҙ уны яҙыусы Ғайса Хөсәйеновтың "Ҡанлы илле биш" тарихи романында 1755 башҡорт ихтилалының бер етәксеһе итеп күрәбеҙ. Романда ул Алҡыш Һөйөндөк тип алынған. Шулай итеп, тарихта Батырша ихтилалы тип аталған күтәрелешкә беҙҙең ауыл ир-азаматтары ла ҡушыла. Ихтилал ҡанға туҙҙырылып баҫтырылғас, Әликәс Һөйөндөктө Ҡотлоюл Ҡолторсаҡ кеүек батырҙар менән Рогервикҡа ҡыуалар, тик 76 йәшлек Әликәс ҡартатай юлда үлеп ҡала. Шул саҡта яндырылған Әликәс ауылы икенсегә Әликәстең улы Киңйәбулаттың исеме менән ҡалҡып сыға һәм XX быуаттың 30-сы йылдарында тарихты тәрән белгән ауыл аҡһаҡалдарының ил етәкселегенә яҙылған хаты нигеҙендә ауылыбыҙға Һөйөндөктөң ейәне Буранбай сәсән исеме бирелә. Хәҙерге ваҡытта ауылыбыҙҙа ошо нәҫелдең төрлө тармағына ҡараған ара вәкилдәре, Һөйөндөк ҡартатайҙың вариҫтары йәшәй. Ауылыбыҙҙың ике-өс кенә нәҫел араһын иҫәпкә алмағанда, тотош ауыл Буранбай сәсән нәҫеленә ҡарай. Беҙҙең ауылда ҡурай тартмаған йорт, оҙон йыр һуҙмаған кеше юҡ. Баймаҡ районында Буранбай сәсән исемендәге үткән оҙон көй бәйгеһендә беҙҙең ауылдан ғына 70-кә яҡын кешенең ҡатнашыуы күп нәмә тураһында һөйләй. Ике йыл элек ауылыбыҙ менән баш ҡаланың Конгресс-холл бинаһында концерт ҡуйҙыҡ.Ошондай тарихлы төбәктә тыуып үҫеп, етмәһә, уның ҡайһындай шанлы биттәрен белгәндән һуң нисек яҙмайһың инде? Кемдер берәү яҙырға тейеш бит. Әле Буранбай сәсән хаҡында тарихи романға материал туплап, шуны яҙыуға тотоноуым. Нисектер, ижадсы булараҡ, иң төп әҫәрем шул роман булыр һымаҡ.

Тағы ла башҡорт шәжәрәләренең бер үҙенсәлеге хаҡында әйткем килә. Уларҙың күбеһе Уралбейгә, йәғни Урал батырға барып ялғана. Былар барыһы ла Урал батырҙың Алып, Саян батырҙар йәшәгән дәүерҙә беҙҙең төбәктә көн күргән аныҡ кеше булыуы хаҡында һөйләй. Нимә генә тимә, шәжәрәләргә халыҡ уйҙырма исемде теркәп ҡуймаҫ. Исеме арҡырыһы йөҙҙәрсә, оҙонлого меңдәрсә саҡрымға һуҙылған тауҙар теҙмәһенә бирелерлек булғас, беҙ Урал батырыбыҙҙың "Урал батыр" эпосында күрһәтелгән батырлыҡтарының да ысынға тап килеүенә шаһитбыҙ һәм ул мифик төҫ алған икән, быныһы ла Урал батырҙың үҙ халҡы өсөн йәнен фиҙа ҡылып, ҡаһарманлыҡ күрһәтелгән ваҡыттың бик бороңғо заманда булыуына ишара. Ә инде ундай ҡаһарманлыҡ, ундай фиҙаҡәрлек элек-электән тик бәйғәмбәрҙәргә генә хас булған. Шулай булғас, беҙ бәйғәмбәрле халыҡ. Урал батыр - Әҙәм бәйғәмбәрҙән башлап Мөхәммәт бәйғәмбәргә тиклем арауыҡта Аллаһы Тәғәлә тарафынан беҙҙең халыҡ өсөн ебәрелгән бәйғәмбәр. Беҙ - бәйғәмбәрле милләт, шуға күрә беҙ юҡ-барға сәбәләнергә, ваҡланырға түгел, үҙ бәҫебеҙҙе үҙебеҙ белеп, Аллаһы Тәғәлә хозурында лайыҡлы йәшәргә тейешбеҙ.

## Кеҫә телефоным юғалғас...

Яңыраҡ кеҫә телефоным юғалды. Әйбер юғалғанға ҡайғырып барыр кеше түгелмен, был йәһәттән оптимисмын. Малы көтөүҙән ҡайтмай, юғалған бер ағай әйтмешләй: "Ниңә уға ҡайғырырға, барҙыҡы юғала, булмаһа, юғалмаҫ та ине хатта. Шуға шатланам: минеке бар ине бит. Юҡтың аты юҡ, ана, булмаған кешеләрҙеке хатта юғалмай ҙа..." Мин дә шулайыраҡ уйлап, үҙемде тынысландырҙым. Баш һау булһын, тинем дә, өйрәнгән уйынсығымды оноторға, был хаҡтағы уйҙарымды ситкәрәк ҡыуырға теләнем. Әммә мин уны ни тиклем оноторға теләһәм, шул тиклем иҫкә төштө, гүйә, имсәгенән көслөк менән айырылған сабый кеүекмен. Кемдер мине бик ҡаты эҙләй ҙә, тапмай кеүек. Донъялағы иң төп ваҡиға ҡайҙалыр бара ла, мин уны ишетмәй-күрмәй-белмәй, ҡоро ҡалған кеүекмен. Йөрөй-йөрөй торғас, хатта тын алыуы ауырлашты, мин мәғлүмәт, мөхит, аралашыу "һауаһы" етешмәй, быуыла башланым да, дүрт көн, дүрт төнгә түҙҙем дә, яңы трубка һатып алдым.

Һай, ул уйынсыҡҡа беҙ тиҙ өйрәндек шул. Әйтерһең, тыуған саҡта уҡ беҙгә тәтәй урынына шуны тотторғандар ҙа, ғүмер баҡый шунан айырылмағанбыҙ кеүек. Аяғына баҫып, арты менән шыуғанынан алып таяҡ таянғандарына тиклем берҙәй үҙ итте был тәтәйҙе. Яңы быуатты, яңы мең йыллыҡты һәр ҡайһыбыҙ үҙенә яңы Америка асып, кеҫә телефоны менән ҡаршыланы. Үҙем уҡығаным булмаһа, әммә ниндәйҙер дини китапта "...килер шундай заман, кешеләр бер бүлмәлә ултырып, бар донъяны ҡарай алыр, донъяның теләһә ниндәй урынынан тороп, ике кеше бер-береһе менән һөйләшер..." тип яҙылған, тиҙәр. Бында, әлбиттә, һүҙ телевизор менән кеҫә телефоны хаҡында барғанлығы көн кеүек асыҡ. Бөгөн килеп аралашыуҙың кеҫә телефоны тип аталған ошо хикмәте тормошобоҙҙоң айырылмаҫ өлөшөнә әүерелде. Әммә әтнәкә шунда: был кешеләр араһындағы аралашыу ихтыяжының артыу күренешеме, әллә кеше күңеленән хисте ҡыуып сығарыусы техник прогрестың кире йоғонтоһо сағылышымы?

Ошондай дилемма менән кеҫә телефонының ыңғай һәм кире яҡтарын бизмәнгә һалып, һалмауырлап ҡараным. Тәүҙә ыңғай яҡ еңә барған һымаҡ булды ла, кире яҡ аҫҡа төшә башланы. Быға нәҡ шул көндәрҙә кеҫә телефонымды юғалтыу сәбәпсе булды. Кеҫә телефонының ҡапылдан башҡа килгән тәүге ыңғай өс сифаты шундалыр тием:

- Ат һәм хат етмәҫ ергә тиҙ генә барып етеү һәм үҙеңә кәрәкле кеше менән аралашыу, мәғлүмәт алыу һәм еткереү сараһы;
- Ваҡытты һәм башҡа матди сығымдарҙы экономиялау сараһы;
- Үҙеңдең кемдәргәлер кәрәк булыуыңды белдереү, һиҙҙертеү һәм тойҙороу сараһы, һ.б.

Ҡапылдан башҡа килгән тәүге өс кире сифаты:

- Телгән кешең менән йәнәт кенә бәйләнешкә инеп, төрлө характерҙағы мәғлүмәт еткереү йә ҡабул итеү психозы, көтөлмәгәнлек синдромы;
- Элемтә мөмкинлегенең артыуы һөҙөмтәһендә һағыныу тойғоһоноң юҡҡа сыға барыуы, хәҙер хатта хат яҙышыу ҙа бөттө;
- Виртуаль аралашыу (СМС, ММС, Аська) кешеләр араһындағы тәбиғи аралашыуҙы юҡҡа сығара, мөнәсәбәттәр һалҡынлығы урынлаштыра, һ.б.

Ҡайһы бер мәғлүмәт сығанаҡтары буйынса кешеләр араһындағы йәшерен аралашыу сереның асылыуына ла сәбәпсе был хикмәтле аралашыу ҡоралы. Йәғни байтаҡ ҡына айырылышыуҙарға (ире янында булғанда ҡатынына башҡа бер ир шылтырата, йә - киреһенсә), енәйәттәргә алып килә кеҫә телефоны, шул уҡ ваҡытта тәфтишселәр өсөн бындай бәйләнештең булыуы енәйәт эштәрен тиҙ арала асырға ла ярҙам итә. Кеҫә телефоны бәйләнеш тулҡындарының һауаны миллион-миллион һыҙыҡтар менән теткеләп бөтөүе арҡаһында эре ҡалаларҙан ҡоштар ҡасып бөттө, өйҙәрҙәге таракан-ҡандалалар юҡҡа сыҡты. Хатта умарталарҙан бал ҡорттары ла ҡаса, тиҙәр...

## Милли рух та шулай...

Баҡтиһән, дүрт көн буйына кеҫә телефоны булмаған арала бик күп туғандарым, яҡындарым, дуҫтарым, таныштарым минең өсөн бик нык борсолоуға ҡалып, хатта ҡурҡыуға төшкән икән. Телефонымда 200 самаһы абонент номеры һаҡлана, шуларҙың 20-ләбе миңә шылтыратҡан, яуап булмағас, күңелдәренә шик-ҡурҡыу инеп ултырған. Бына бит нисек: минең һаҡһыҙлығым арҡаһында башҡалар менән элемтәнең өҙөлөүе уларҙы минең хаҡта борсолорға мәжбүр иткән. Телефоным юғалған көндөң иртәгәһенә эшкә килгәс, мине юғалтып шылтыратыуҙарҙан эш телефоны "ҡыпҡыҙыл" булды. Барыһы ла кисекмәҫтән яңы телефон алырға тәҡдим итте.

Төптән уйлап ҡараһаң, халыҡты бер милләт итеп ойоштороп йәшәтеүсе көс тә, бәйләүсе милли рух та ошондай уҡ кеҫә телефоны бәйләнеше кеүек милли мөхитте тәшкил итә бит. Булат ағай Рафиҡов милли рух тупланмаһын йыш ҡына Ҡош юлы менән сағыштырып, беҙҙең аранан киткәндәрҙең рухы Ҡош юлына - милли рух тупланмаһына олғашып ойоша, беҙ иһә шунда ҡарап үҙебеҙгә көс алабыҙ, тип әйтә торғайны. Ә бит ул милли рух тупланмаһының Ҡош юлы образын бик дөрөҫ билдәләгән. Беренсенән, Ҡош юлы ҡиблаға табан һуҙыла, икенсенән, күҙ-ҡараштары юғарыла булғандың рухы ла юғары. "Абынмаҫҡа аяҡ аҫтын ғына ҡарап баҫҡан йондоҙ күрәме?" тип яҙғайны халыҡ шағиры Рәми Ғарипов. Ә кемдең башы юғары була һуң? Ҡош юлына ҡарап йөрөгән кешенеке генәме? Юҡ, әлбиттә, сөнки бында Ҡош юлы милли рух образы ғына. Үҙенең кем икәнен, тарихын, ата-бабаларының данлыҡлы үткәнен, ҡаһарманлығын белгән, шуның менән ғорурланған кешенең башы юғары була. Ундай кеше үткәне менән ғорурлана, бөгөнгөһө менән һоҡлана, иртәгәһенә өмөт менән ҡарай ала.

Беҙ кеҫә телефоны аша аралашҡанда бер-беребеҙҙе күҙгә күренмәгән тулҡындар, йышлыҡтар, виртуаль сымдар бәйләй. Милли рух та беҙҙе бер-беребеҙгә шулай тоташтыра. Беҙ милли рух аша аралашҡанда тик үҙебеҙ, тик башҡорт кешеһе генә аңлаған, тойған, һиҙгән ым-ишаралар, үҙенсәлекле мәғлүмәт каналдары аша бер-беребеҙгә бәйлебеҙ. Беҙҙең ундағы йышлыҡҡа бер кем дә инә алмай, әммә башҡалар беҙҙең элемтәгә зыян килтерә ала. Был йәһәттән төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын "кеҫә телефондарын юғалтыусылар" иҫәбенә индерәм. Уларға беҙҙең менән бер элемтәлә булыр өсөн "Ҡаҙан йышлығы" ҡамасаулай. Әлеге ваҡытта ул төбәк башҡорттарын үҙ милли асылына ҡайтарыу буйынса эштәр алып барыла, әлбиттә, әммә былар бик аҙ.

Иң мөһиме - башҡортса аралашыу, йолалар үтәп йәшәү мөхитен булдырыу фарыҙ унда.

## Ҡурҡыу ҡурҡаҡлыкты аңлатамы?

Алдағы бүлектә ҡурҡыу тойғоһо хаҡында ла һүҙ алып барҙыҡ. Һуңғы ваҡытта ошо тойғо хаҡында тәрләсә уйланып, ҡыҙыҡ ҡына һығымталарға ла килгәләнем. Ҡайһы бер фекерҙәремде һеҙгә лә еткерәм.

Ҡурҡаҡлыҡтан бахырлыҡҡа, меҫкенлеккә бер генә аҙым, ҡурҡыуын еңә алмаған кеше ҡолға тиң, башҡаларҙың, ваҡиғаларҙың, ситуацияларҙың ҡоло. Һәр хәлдә, ҡурҡаҡтар менән башҡалар идара итә. Был хәлдән сығыу өсөн кешегә ихтыяр, характер талап ителә.

Шул уҡ ваҡытта кешелек яралғандан алып ошо тойғо уны йәшәткән һәм кешелек үҫешенең төп этәргес көсө лә ошо тойғоға бәйле. Һәр кешелә булған ин төп ҡурҡыу - үлемдән ҡурҡыу һәм үлем ҡурҡынысы кешегә үҙен бәлә-һәләкәттәрҙән һаҡлап, үлемгә килтереүсе хәлдәрҙән ҡурсалап, ярамағандан тыйылып, дөрөҫ итеп йәшәргә мәжбүр итә. Ғү-

ғоһо ла кешене кәмселектәренән арынып, дөрөҫ йәшәргә өйрәтәләр, тип уйлайым. Дин әҙәм балаһын теге донъя ғазабы, тамуҡ уты менән ҡурҡытып, хаҡ, дөрөҫ йәшәү рәүешен аңлата. Улай ғына түгел, Йәһүҙи диненән башҡаһы, һәр бер дин был донъя, тормош, ғүмер теге донъяға лайыҡлы рәүештә барыуға әҙерләнеү мөҙҙәте, тип аңлата. Дини китаптарҙа теге донъя ғазаптарынан ҡурҡыу һәр бер һүҙҙең аҫҡы мәғәнәһе итеп һалынған. Тимәк, теге донъя ғазаптарынан ҡурҡҡан кеше Аллаһы Тәғәлә хозурына лайыҡлы барыр өсөн ғүмер ҡаһарманлығы ҡылырға, башҡаларға зыян итмәй, кәрәк булһа, улар өсөн йәнен фиҙа ҡылырға бурыслы. Ҡыҙыҡ килеп сыға бында: теге донъя ғазаптарынан ҡурҡҡан кеше батырлыҡ һәм фиҙаҡәрлек ҡыла. Тимәк, ҡурҡыу тойғоһо менән ҡурҡаҡлыҡ араһында ҙур айырма бар.

Илебеҙ халҡы йыш ҡына, бигерәк тә ауыр мәлдәрҙә, "халыҡтар атаһы" Сталинды иҫкә төшөрә, ҡайһы берәүҙәр шулай тип әйтеп тә ҡуя: "Эх, Сталин кәрәк ине ошо мәлдә, ана шулар-шуларҙың кәрәген бирер

йәлләдтән, опричниктан ҡурҡыу тойғоһон һеңдерә.

АҠШ-тың хәҙерге етәкселәре лә Иван Грозныйҙың был һабағын бик яҡшы үҙләштергән. Үҙ граждандарын билдәле ҡалыпта тотор өсөн нимә генә уйлап сығармайҙар: бөтә донъя терроризм ҡурҡынысы, СПИД, тауыҡ һәм сусҡа киҙеүе, иҡтисади көрсөк, глобаль йылыныу, һ.б. АҠШ-ҡа беҙҙекеләр ҙә эйәрә. Шуның бәлә: кешелек ҡурҡыу тойғоһоҙ йәшәй алмай. Дини юлға баҫыу, Аллаһы Тәғәлә хозурына барыу ошондай барлыҡ ҡурҡыу тойғоларын юҡҡа сығарыр ине. Башҡаса юлы юҡ кешелектең...

## Башҡорт империяһы

Беҙ йыш ҡына милләтебеҙҙең ырыуҙар феноменына тейешле иғтибар бирмәйбеҙ, ҡайһыларыбыҙ ырыуҙар хәрәкәтен хатта трайболизм күренеше тип тә баһаланы. Нисек кенә булмаһын, милләтебеҙҙең йәҙҙәрсә ырыуҙан тороуына өр-яңы күҙлектән ҡарарға, этногенезды ошо юҫыҡта өйрәнергә ваҡыттыр. Ғалимдар һуңғы ваҡытта боронғо еребеҙҙең, тышҡы Башҡорт иленең Волганан арыраҡ хәҙерге Рәсәйҙең Владимир өлкәһенә тиклем һуҙылғанлығын иҫбатлай. Ғалим Рәшит Шәкүр хатта ундағы Сунгир мәмерйәһен беҙҙенсә Соңғор тип атай. Әйткәндәй, урыҫ этимологтары Сунгирҙың килеп сығышын бер нисек тә аңлата алмай әлегә.

башҡаларҙың ерен яулап алыу атһа, улар кеүек үк йөҙәрләгән ҡәүемдәрҙе үҙенә ҡуша алған Башҡорт иле лә шул уҡ империя түгелме һуң? Әлбиттә, башҡорт юғарыла һанап үтелгән империялар төҙөлгән саҡта эйәр өҫтөндә уларға яңы ерҙәр яулашҡан, әммә үҙ империяһын төҙөгәндә быны бүтәндәрҙең ерен яулау иҫәбенә башҡармаған. Тарихи факттар шул хаҡта һөйләй: аҙаҡ башҡорт халҡының, шул иҫәптән Башҡорт иленең бер өлөшө булып киткән ырыуҙар асылда төрлө тәбиғи катаклизмдарҙан, башҡа ҡәбиләләрҙең, дәүләттәрҙең һөжүменән ҡасып, Уралтауға килеп ауырға, башҡорт халҡына килеп һыйынырға мәжбүр булған. Уларҙың иң һуңғылары: Дәште Ҡыпсаҡ импери-

был дәүләттә йәшәүсе милләттәр менән уртаҡ тамыры булыуы шул хаҡта һөйләй түгелме?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙҙең халыкта, ғөмүмән, мосолмандарҙа тыуған көндө билдәләү йолаһы булмаған һәм беҙҙең атай-олатайҙар, әсәй-өләсәйҙәр 60 йәшендә лә, 70 йәшендә лә йәштәрсә сая рухлы, күркәм килбәтле, ихлас күңелле булып һаҡлана алған. Психологтар, кемдәр тыуған көнөн үткәрә, шул үҙенең ҡартайыуын үҙ-үҙенә һәм башҡаларға раҫлап, ысынлап та ҡартая башлай, тыуған көндә алынған бүләк шул ҡартайыуыңды әйбер менән нығытыусы символ, ти. Шуға күрә мин тыуған көндө үткәреү мәсьәләһенә шартлы күренеш итеп ҡарайым. Иң мөһиме: күңелең йәш, йөрәгең дәртле булһын. Күпме йәшәүеңдән бигерәк, нисек йәшәүең шарт. Ни өсөн тигәндә, бер кеше 50 йә 60 йәшенә тиклем өлгәшкәндә икенсе бер йәш кеше 30 йә 40 йәшенә тиклем атҡарып сығыуы бар.**

**Шулай ҙа яҙыусыларҙың, сәнғәт әһелдәренең, дәүләт эшмәкәрҙәренең һәм башҡаларҙың юбилейҙарын билдәләү йолаһы бар икән, быны мин шағир Марат Кәримов әйткәнсә, "отчет-һайлау йыйылышы" ны-**

# МИЛЛӘТ,

## үҙебеҙ белеү фарыҙ…



мерҙең иртә өҙөлөүенән ҡурҡыу кешелекте фәнни-техник прогресс юлына, комфортлы йәшәү рәүешенә алып килгән. Әгәр ҙә кемдер: "Мин бер нәмәнән дә, хатта үлемдән дә ҡурҡмайым", - тип әйтә икән, уға ышанмағыҙ. Сөнки иң ҡурҡаҡ кеше шулай тип әйтеп, үҙен ҡурҡыныс хәлдәрҙән араларға, ҡурҡыныс менән янаусыларҙы иҫкәртеп, үҙ-үҙенә ҡот ҡойорға, үҙен бәлә-ҡазаларҙан алыҫлаштырырға тырыша. Шул уҡ ваҡытта ҡаршыла үлем ҡурҡынысы менән асыҡтанасыҡ янаған көскә ҡаршы күкрәгенде ҡуйып, күрәләтә үлемгә барыуҙы ғына батырлыҡ тип атап буламы? Ни өсөн тигәндә, кеше был осраҡта үҙенә һәләкәт менән янаған көстән, ҡурҡыу тойғоһонан үлеп ҡотола. Бында тик бер яҡлы ғына аңлатма биреү мөмкин дә түгелдер. Бер олатай һуғыш хаҡында һөйләүебеҙҙе үтенгәс, шулай тип яуап биргәйне: "Һәр кемгә лә йән гәзиз. Мине һуғышта шәп йүгереүем ҡотҡарҙы. Һуғыштың тәүге йылдарында винтовка тотоп, автомат, танк менән яҡшы ҡоралланған фашисҡа ҡаршы барғанда, тик шәп йүгереүселәр генә ҡотола алды, ҡалғандарҙы танктар иҙеп үтте...". Ошонан сығып ҡына ошо олатайҙы ҡурҡаҡ тип атап буламы? Әгәр ҙә ул яу яланында ятып ҡалған булһа, беҙ уны "Батырҙарса һәләк булыусылар" исемлегенә индерер инекме?

Ояттан, көлкөгә ҡалыуҙан, рисуай булыуҙан ҡурҡыу той-

ине...". Сталинды яҡлаусы икенсе төркөм шундай диктаторҙың барлыҡҡа килеүен объектив күренеш тип баһалап, дәлилдәр килтерә башлай. Хәҙер беҙ ҙә үҙебеҙгә шундай һорау бирәйек: "Сталин булмаһа,

***Әсәйем мәрхүмә һөйләүенсә, мин өс көн, өс төн буйы тыйғыһыҙ булып илап, инде тын ала алмаҫ хәлгә етеп, тәнем күгәрә башлағас, Мөжәүир олатайға күрһәтергә булғандар. Инде үлдем тигән ерҙән. Олатай мине өшкөргән дә: "Был балағыҙҙан ғалим йә шағир сыға. Күҙ менән ҡаш араһында булһын..." - тигән. Ошо һүҙ Тайфа ҡарсәйемә етә ҡалғандыр инде, ул мине ғаиләбеҙҙәге ун бер бала араһынан айырыңҡырап ҡараны, баҡты. Күңеле әкиәттәр, йырҙар, бәйеттәр, хикәйәттәр менән лыҡа тулы хазина ине. Мине елкәһенә атландырып алыр ине лә, урманҡырҙарға алып китер, үҙе еләк, ҡарағат, сейә тирер, бер туҡтауһыҙ йырлар, әкиәт, бәйет, хикәйәт һөйләр ине. Миңә шулар йоғоп ҡалғандыр инде...***

икенсе кеше ошондай диктатор булып китә алыр инеме?". Һис шикһеҙ, сөнки "сталинизм" большевиктар власҡа килеп, сиркәү, мәсеттәрҙе емереп, дин әһелдәрен юҡ итеп, яңы атеистик йәмғиәт төҙөгәндән һуң кешеләрҙең күңелендә диндәге ҡурҡыу тойғоһо урынына ултыртылған күренеш. Кеше күңелендә ҡурҡыу тойғоһо һәр саҡ булырға тейеш, ул әгәр ҙә Аллаһы Тәғәләнең язаһынан ҡурҡмай икән, Иблестән ҡурҡып йәшәргә мәжбүр. "Сталинизм"ға нигеҙҙе Ленин түгел, Иван Грозный һалғаны ла мәғлүм. Күпме руханиҙарҙың башын сабып өҙә Иван IV, урынына кешеләрҙең күңеленә

Ошо ерҙә урынлы һорау тыуа: тәбиғәтендә ербаҫарлыҡ сифаты булмаған халыҡтың ядроһы булған, Уралтауҙы йәне яралған төйәк тип иҫәпләгән ырыуҙар нисек итеп башҡа ҡәүемдәрҙе үҙенә буйһондороп, үҙҙәрен башҡорт милләтенең бер өлөшө итеп таныта алған һуң? Таныта алғанмы, әллә мәжбүр иткәнме? Беҙ, fәҙәттә, былдай ҡеүәткә эйә булған, йәғни йөҙҙәрсә ҡәүемдәрҙе үҙенә ҡуша алған халыҡты, дәүләтте рәсми телдә империя тип ҡарайбыҙ. Һундар, Алтын Урҙа, Туран, Дәште Ҡыпсаҡ, Византия, Рим, Рәсәй, Советтар Союзы, АҠШ, һ.б. империялар. Был империялар барлыҡҡа килгәндә уларҙың эшмәкәрлегендә

яһы тарҡалғандан һуң Уралтауға күсеүсе ҡыпсаҡтар һәм Иван Грозный суҡындырыуынан башҡорт халҡына ҡасыусы татарҙар, мишәрҙәрҙең бер өлөшө. Миненсә, ошоға оҡшаш хәл-күренештәр меңәрләгән йылдар һуҙымында дауам иткән. Үҙенең төп ҡәүеменән айырылып килгәндәргә башҡорттар ер бүлеп биргән, тегеләр рәхмәт йөҙөнән башҡортлоҡто ҡабул иткән. Әлбиттә, бер милләт булып ойошоу еңел генә бармаған, быны тарихтағы ырыу-ара низағтарҙың, һуғыштарҙың ара-тирә сығып тороуы дәлилләй. Башҡорт милләте составындағы ырыуҙарҙың күп булыуы, уларҙың һәр ҡайһыһының Ер шарындағы теге йәки

**мағыраҡ итеп ҡарау яғындамын. Ысынлап та, яҙыусы йәки башҡа төр ижад кешеһе 50, 60, 70 һәм башҡа түңәрәк даталары тулған көндә уҡыусыһы һәм тамашасыһы алдында һынау тота, отчет бирә һәм "йәйлышта ҡатнашыусылар" шундай хөкөм ҡарары сығара: был ижад кешеһен артабан исемлектә ҡалдырғамы-юҡмы? Юбилейҙарҙа ижадсыға һәр саҡ маҡтау һүҙҙәре әйтелә, тимәк, ялғанлауға, монафиҡлыҡҡа юл ҡуйыла. Тимәк, юбилейын үткәрәм, тип, кеше йыйып, үҙенә ялған дан көҫәп ултырыусы кеше барыбер гонаһҡа бата. Кем белә, бәлки, мосолмандарҙа тыуған көндө үткәреү йолаһы ҡаралмауы ла ошо хәлгә бәйлелер.**

**Яңыраҡ билдәле рок йырсыһы Гарик Сукачев үҙенең 50 йәшен "5:0 - минең файҙаға!" тип билдәләне. Мин иһә ошоға тиклем туплаған тәжрибәмдән сығып, был мәлемде шулай тип атайым: "Ниһайәт, йәшәй башларға ваҡыт етте..."**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ




**Моғайын, борон-борон заманда әҙәм балаһы үҙ тойғоларын һүҙ менән әйтеп тә, аңлатып та бирә алмайынса аҙапланған бер илаһи мәлдә күкрәген тултырып йырлап ебәргәндер... Уның йырында тыуған еренә булған һөйөүе, яҡындарына ҡарата рәхмәт хисе, һөйгәненә булған мөхәббәте, матурлыҡҡа һоҡланыуы сағылғандыр. Ғөмүмән, кеше тауышы - Хоҙай тарафынан яратылған иң камил музыка ҡоралы ул. Кеше тауышынан да бай, ҡөҙрәтле һәм шул уҡ ваҡытта нескә музыка ҡоралының булыуы мөмкин түгел. Бына шундай һығымтаға килəм мин Мәғәфүр ағай Хисмәтуллиндың тауышын тыңлаған һайын.**

# МӘҒӘФҮР ХИСМӘТУЛЛИНДЫ ИҪКӘ АЛЫП...

## "Хисмәтуллин феномены" - нимә ул?

Мәғәфүр Хисмәтуллиндың ижади тормошо тулыһынса тиерлек Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры менән бәйле. Театрҙа эшләгән 40 йыл ғүмер эсендә тыуҙырған 60-ҡа яҡын ролен, тиҫтәләгән режиссер хеҙмәтен, йәмәғәт эштәрен барлап ҡына ла уның ошо театрға ни тиклем күп көс һалғанын төҫмөрләйһең. Опера театрының һәр бер мәрмәр ташы уның тауышын хәтерләй кеүек, сөнки артистың ҡаҙаныштары - театрҙың ҡаҙаныштары, яҙмышының йондоҙло мәлдәре - театр тарихының иң юғары уңыштарына әүерелде. Әле үҙе тере саҡта уҡ театрҙың ул йырлаған осоро "Хисмәтуллин осоро" тип аталырға хаҡлы икәнлеген барыһы ла аңлай ине.

Ә бит һәр заманда ла сағыу һәләтле йырсылар тыуа торған. Тик халыҡ тарафынан бөйөклөк юғарылығына күтәрелә алғандары һанаулы ғына. "Хисмәтуллин феномен"ының сере, минеңсә, ябай ҙа, ҡатмарлы ла. Уның нигеҙен, әлбиттә, тамырҙары менән тыуған еренә ерегеп үҫкән тәбиғи таланты тәшкил итә. Әммә ошо тәбиғәт бүләгенә аныҡ аҡыл менән тәрән фекерләү ҡеүәһе һәм хайран ҡалырлыҡ, фантастик дәрәжәләге егәрлелек ҡушылмаһа, талант та һайыға. "Хисмәтуллин феномены", моғайын, ошо өс төшөнсәнән торалыр.

М.Хисмәтуллиндың ижади биографияһы ғәжәйеп бай һәм күп яҡлы. Ғөмүмән, уның актерлыҡ булмышы киң таралған "амплуа" төшөнсәһен инҡар иткән кеүек. Бер кистә - Салауат батыр, икенсеһендә - иҫерек Яппар, өсөнсөһөндә - хәйләкәр немец Бомелий йәки яуыз Көбәк тарханға әүерелә алған актер амплуа сиктәренән юғары. Йырсының тауышында тамашасы берсә нескә күңелле шағирҙың хис-тойғоларын, берсә ябай крәҫтиән ҡартының үткер аҡылын, берсә трагик геройҙың эске һыҙланыуҙарын ишетеп тетрәнде. Улар менән бергәләп янды, ашҡынды, һөйҙө, иланы һәм көлдө... Артистың иҫтә ҡалырлыҡ образдары бихисап, әммә сәнғәт донъяһында тотҡан урынын, уның артислыҡ ҡаһарманлығын асыҡлау өсөн бер генә ролен атау ҙа етә. Ул, әлбиттә, Салауат образы.

М.Хисмәтуллин башҡорт сәнғәтендә беренсе Салауат түгел. Уға тиклем милли герой драма сәхнәһендә һәм кино экранында Арыҫлан Мөбәрәков тыуҙырған образ аша һынланып, халыҡ күңелендә лайыҡлы урын алып өлгөргәйне. Мөбәрәковтың Салауаты - яугир, ил батыры. Хисмәтуллиндың Салауаты иһә - иң тәүге нәүбәттә, шағир. Тыуған иле менән хушлашҡан арияһында ("Хуш, Уралым") ла, "Әминәм" арияһында ла тамашасы алдында - эскерһеҙ, шиғри күңелле, гәлсәрҙәй саф йөрәкле йәш егет пәйҙә була. Тап шундай - үҙ иле өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер торған, оло йөрәкле шәхес кенә халҡын яуға күтәрер көс тапҡандыр, тип ышанаһың да, Салауат мотлаҡ шундай булғандыр, тип уйлайһың...

Мәғәфүр Хисмәтулла улы Салауат партияһын 1955 йылда Мәскәүҙә үткән Башҡортостан сәнғәте һәм әҙәбиәте унконлөгөндә тәүге тапҡыр башҡара. Уның Салауаты күпте күргән Мәскәү халҡын таң ҡалдыра, һоҡландыра, әсир итә. Опера барышын күҙәтеп тороусы танылған дирижер Небольсин, һоҡланыуынан түҙмәйенсә, сәхнәгә йүгереп менеп, Мәғәфүрҙе күтәреп ала... Зал алҡыштарға күмелә, шау-шыуҙан, "браво"-ларҙан шартлар сиккә етә... Артистың йондоҙло сәғәте театрҙың ғына түгел, ә тотош Башҡортостан сәнғәтенең енеүенә әүерелә: донъяға башҡорт классик операһының тыуыуын тап ошо мәлдән иҫәпләргә кәрәк. Һәм бында һис тә арттырыу юҡ, сөнки, барыһына ла мәғлүм булыуынса, сәнғәт әҫәре, ҡасан ижад ителеүенә ҡарамаҫтан, донъяға ысын мәғәнәһендә башҡарылған мәлдә тыуа. Юғиһә, хатта гениаль әҫәрҙәр ҙә ҡағыҙҙа ҡалыр ине... "Салауат Юлаев" операһы әле булһа сәхнәләрҙән төшмәй. Тап ошо спектакль театрҙың һәм, ғөмүмән, башҡорт опера сәнғәтенең үҙенсәлекле визит карточкаһы, символы дәрәжәһенә күтәрелде. Бында, әлбиттә, М.Хисмәтуллиндың өлөшө баһалап бөткөһөҙ ҙур. Башҡарыусылар алмашына тора, тамашасы ла үҙгәрә, тик әле лә, премьера спектакленә ярты быуаттан ашыу ваҡыт уҙғас та, Хисмәтуллиндың Салауаты башҡорт опера сәнғәтенең иң юғары ҡаҙанышы булып тора.

## "Йыр ул- хеҙмәт"

Был фекергә Мәғәфүр Хисмәтулла улы ҡабат-ҡабат әйләнеп ҡайта ине. "Еңел йырлайһың, тиҙәр... Ә миңә бер ҡасан да йырлау еңел булманы. Йырлау сәнғәте - ул ауыр хеҙмәт. Концерт булһынмы ул, спектаклме - бар көсөңдө һалып, ҡара тиргә төшөп эшләмәһәң , сәнғәт булмай ул, тамашасыға барып етмәй..."

Ғәмәлдә, М.Хисмәтуллиндың сәнғәте ябай һәм бөйөк аҡылды иҫбатлай - ниндәй генә һөнәр эйәһе булмаһын, кеше үҙен-үҙе үҫтерһә генә камиллыҡҡа яҡынлаша. Был фекер - артистың ғүмерлек ижади принцибы. Ниндәй генә үрҙәргә үрләһә лә, ул бер ҡасан да үҙ өҫтөндә эшләүен туҡтатманы һәм режиссер, педагог булараҡ, башҡаларҙан да шуны талап итә торғайны.

"Нимә ул моң?" тигән һорауға Мәғәфүр Хисмәтулла улының яуабы: "Моң ул - кеше. Бына бында ул моң (күкрәгенә күрһәтә). Бүтән ерҙә юҡ моң, ул - күңел... Бик моңло ине инәйем, кешелекле ине..." Ҡайһы бер йырсылар хаҡында һүҙ барғанда, әсенеп: "Тауышы бынамын тигән, әммә күңеле буш, фекер юҡ",- ти ине. Баҡтиһәң, ысынлап та, кешенең тауыш яңғырашынан уҡ ниндәйерәк кеше икәнен "иҫәпләп" сығарып була икән: аҡыллымы, буш ҡыуыҡмы, яҡшы кешеме, әллә "моңһоҙмо"...

Хисмәтуллиндың лирик-драматик теноры сисә алмаҫтай техник мәсьәләләр юҡ ине, буғай. Барлыҡ диапазонында ла берҙәй тигеҙ яңғырашлы, түбәнге регистрҙан алып иң юғары ноталарға тиклем берҙәй сифатлы, ағымлы, саф тауыш... Йырсы сәнғәтенең нигеҙе, төп ҡиммәте - тауыштың тембр матурлығы. Был йәһәттән Хисмәтуллиндың тауышы - һирәк осрай торған хазина ул. Унда ниндәйҙер эске нәзәкәтлелек һәм аристократтарса зауыҡ (ябай ауыл егетендә!), күңел юғарылығы һәм тыйнаҡлыҡ һыҙаттары ишетелә. Ә инде һәр тенор өсөн иң сетерекле булған юғары ноталарҙа был тауыш күңелдең иң нескә ҡылдарын тартып, тәндәрҙе зембереҙәтә, тулҡынландыра, әҫәрләндерә... Көсөргәнешле хеҙмәт аша дөйөм вокаль мәҙәниәткә эйә булырға, күнекмәләр ярҙамында башҡарыу оҫталығын шымартырға мөмкин. Әммә тауыш матурлығы - бары тик тәбиғәттән бирелгән байлыҡ, уны яһалма рәүештә тыуҙырып булмай.

## Йырсы ла, режиссер ҙа...

Опера йырсыһы һәм опера режиссеры. Был ике һөнәр һәр ҡайһыһы айырым ғүмер талап итә, ә М.Хисмәтуллинда иһә улар бер үк шәхестең ике тиң өлөшө булып, бер-береһенә үрелеп үҫешкән. Уның режиссер эштәре исемлегендә 13 спектакль, улар араһында - донъя классикаһы һәм рус опералары, башҡорт авторҙарының әҫәрҙәре. Йырсының ижади яҡындан белгәндәр өсөн уның режиссерлыҡ тәжрибәләре һис тә ғәжәп хәл булып тойолманы, киреһенсә, сәхнә эшмәкәрлегенең тәбиғи дауамы итеп ҡабул ителде. Ысынлап та, опера йырсыһының ихтыяждарын энәһенән-ебенә хәтлем белмәй тороп, нисек опера ҡуймаҡ кәрәк? Һәм, киреһенсә, режиссерлыҡ һәләте уға тәрән сәхнә образдары тыуҙырырға булышлыҡ итте.

Роль өҫтөндә эшләгәндә уның өсөн мөһим һәм ваҡ әйберҙәр юҡ ине. Һәр бер ролендә - ҙур булһынмы ул, бәләкәйме - камиллыҡҡа ынтылды артист һәм вокаль мәсьәләләрҙән тыш (улар, әлбиттә, иң тәүге сиратта хәл ителергә тейеш), образ өҫтөндә эшләүгә ғәйәт ҙур әһәмиәт бирә белде. Сәхнәлә үҙенде тотоу, хәрәкәттәр, күҙ ҡараштары, костюм, грим дөрөҫлөгө - уның өсөн барыһы ла мөһим. Бында уға, һис шикһеҙ, ижад юлын драма театры сәхнәһендә башлауы ярҙам иткәндер.

Һәр ҙур талантҡа хас төп һыҙат ул - сама белеү. Камиллыҡ үҙе шул сама тойғоһон аңлаталыр ҙа, сөнки ниндәй жанрҙы алма - трагедиямы, комедиямы - саҡ ҡына арттырыу, йәки, киреһенсә, еренә еткермәү - алдашыуға килтерә. Һәм тамашасы уны шундуҡ һиҙә, күрә, аңлай. Һәм... сәнғәт юҡҡа сыҡты тигән һүҙ. Мәғәфүр Хисмәтуллинды сама тойғоһо бер ҡасан да ташламаны, ул тойғо уға тәбиғәт тарафынан бирелгәйне. Бына ошо тойғо уның халыҡ йырҙарын башҡарыуында ла айырым-асыҡ сағыла. Башҡорт оҙон көйҙәрен йырсы, милли башҡарыу традицияларын Италияның bel canto сәнғәте менән органик рәүештә ҡушып, классик юғарылыҡҡа күтәрҙе. "Урал", "Һандуғас", "Аҙамат", "Шәүрә", "Үткән ғүмер" - был йырҙар бер нисә быуынды тыуған ил тойғоһонда тәрбиәләне, зауыҡландырҙы, рухи аҙыҡ бирҙе, йәш йырсылар өсөн өлгө булып хеҙмәт итте. Әйткәндәй, бөгөн башҡорт сәхнәһендә оҙон көйҙәрҙе башҡарыусылар күбәйҙе, әммә йыш ҡына йырсыларға башҡорт монона хас сама тойғоһо етеңкерәмәй... Һөҙөмтәлә тыңлаусылар "башҡорт йыры" тигән исем аҫтында самаһыҙ күп семәрле-мелизмлы әллә татар, әллә төрөк, әллә әзербайжан көйөн тыңларға мәжбүр... Был йәһәттән Мәғәфүр Хисмәтуллиндың сәнғәте, һис шикһеҙ, оҫталыҡ мәктәбе булырлыҡ.

## Бәхет тураһында уйланыу

Мәғәфүр Хисмәтуллин үҙен бәхетле итеп тойҙомо икән? Был һорауыма уның яуабы, һәр ваҡыттағыса, көтөлмәгәнерәк, үҙенсәлекле булып сыҡты. "Беләһеңме, исемем нимәне аңлата?" - ти һәм үҙе үк яуап та бирә: "Мәғәфүр ул - ғәфү ителгән тигән һүҙҙе аңлата. Тимәк, минең бар гонаһтарым да алдан уҡ ярлыҡанған..."

Мәғәфүр ағай кеткелдәп кенә көлөп ала ла, шунда уҡ етдиләнә: "Бәхет ул - яратыуҙа. Ғүмер буйы яратып, бар көсөмдө биреп эшләнем. Тамашасымдың ихлас яратыуын татыным, ә бит халыҡ һөйөүен һатып алып булмай..."

М.Хисмәтуллиндың театраль яҙмышы, ысынлап та, бәхетле булды. Уны ғүмере буйы ятҡан геройы - Салауат һыны оҙата барҙы. Нисә тапҡыр сыҡҡандыр ул сәхнәлә Салауатты йырларға - йөҙмө, меңме?

Быныһы билдәһеҙ. Тәүләп исемен ил кимәлендә яңғыратҡан, данға күмгән роле - Салауат, һәм һуңғы тапҡыр Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры сәхнәһенә сығыуы ла - "Салауат Юлаев" спектаклендә булды.

...Опера театры. 1995 йыл. Спектакль артистың 80 йәшлек юбилейына арналғайны. Әммә кисәгә йыйылған халыҡ ҡәҙимге спектакль түгел, ә иҫ киткес тамашаның шаһитына әүерелде. Операның беренсе актында Салауат костюмында Мәғәфүр Хисмәтуллинды күргәс, зал аяғүрә тороп алҡышланы. Олораҡ тамашасылар был мәлдә артистың тиҫтәләгән йыл элек тәүләп сәхнәгә күк атҡа атланып балҡып килеп сығыуын хәтерләгәндер... Кисәнең режиссеры Марат Хисмәтуллиндың ижади асышы булды был: оло Салауат, куплеттарын йырлап бөткәс, башынан ҡамсат бүркен һалып, йәш Салауат - Хәмит Ишбулдинға кейҙерҙе. Шуның менән мәшһүр артист сәхнә менән хушлашты, йәштәргә үҙ фатихаһын бирҙе... Был арала күмәк хор артистары араһында сәхнә костюмы кейгән Марат Хисмәтуллинды, бәлки, күптәр танымағандыр ҙа. Олоғайған атаһының сикһеҙ тулҡынланыуын аңлап, янында булыуҙы хәйерлерәк күргәндер, ахыры, улы...

Спектакль артабан ҡәҙимгесә дауам итте. Иң ҙур тетрәнеү тамашасыны операның һуңғы сәхнәһендә көтә ине әле. Әминәне "үлтергәс", залда ҡапыл ут һүнде һәм кино экраны пәйҙә булды. Экранда Әминә - Баныу Вәлиева кәүҙәһе өҫтөндә эйелгән Салауат - йәш Мәғәфүр Хисмәтуллин. Һәм залды сихырлап, моң ағылды:

"Һүндергәндәр минең күҙ нурымды ..."

Был минуттарҙа күҙ йәштәрен тыйыу мөмкин түгел ине. Залдағы һәр кем - нисә йәштә, ниндәй милләттән булмаһын, был мәлдә ҡабатланмаҫ Салауат менән хушлашты, уға ҡушылып моңланды, уның менән бергә иланы...

Ҡайһы бер ғалимдар раҫлауынса, бәхет ғүмерҙе оҙайта. Ә шулай ҙа олоғайып та сәхнәлә йәшәүсе талант эйәләре бөтә донъя кимәлендә бармаҡ менән генә һанарлыҡ. 80 йәшенә тиклем сәхнәлә йырлаған Мәғәфүр Хисмәтулла улы өсөн ысын бәхет ижад, сәхнә, йырһыҙ мөмкин булмағандыр.

Италияның бөйөк йырсыһы Джильи хаҡында: "Уның тауышында туған халҡының түгелмәгән күҙ йәштәре яңғырай", - тигән бер белгес. Был һүҙҙәр Мәғәфүр Хисмәтуллиндың ҡабатланмаҫ сәнғәтенә тулыһынса тап килә. Уның тауышында ла бит башҡорт халҡының бәхет-шатлыҡтары, хыялдары, ҡайғы-хәсрәте, ҡаһарманлығы, Уралына булған һөйөүе мөлдөрәмә тулышып, түгелмәгән күҙ йәштәре булып сыңлай. Яҡты күҙ йәштәре булып...

**Миләүшә ИҘРИСОВА,**
**музыка белгесе.**

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО



# АЙҒЫР

## (МӘҘӘК ХӘЛДӘР)

**Белеүегеҙсә, даими алып барыла торған конкурс ул -"Алдар менән Ерәнсә ҡоро". Ҡушылығыҙ уға, ауылдарҙағы, төбәктәге, коллективығыҙҙағы беҙҙең милләткә генә хас тапҡырлыҡ, берҡатлылыҡ, ихласлыҡ сағылған мәҙәк хәлдәр тураһында яҙып ебәрегеҙ. "Башҡорт юморы" тигән китапты бергәләп яҙайыҡ.**

Башҡортостандың халыҡ артисы Кашаф ағай Нәзиров тыумышы менән Ҡырмыҫҡалы районы Алайғыр ауылынан ине. Ул бер ваҡытта ла санаторийҙа ял итмәне, отпускыһын гел генә үҙенең тыуған ауылында үткәрә торғайны. Шулай бер йылды, сираттағы ялы еткәс, Кашаф ағай ҡайтҡан да, тәмәкеһен көйрәтеп, ауылында ята икән. Әсәһе:

- Халыҡ бесәнгә төшә башланы, сабынлыҡты ҡарап ҡайтыр инең, имен ята микән, - тигәс, ат һорарға киткән. Сабынлыҡ йыраҡ ҡына, шуға күрә йәйәү барыуҙы ауырһыныпмы, әллә артист башым менән нишләп йәйәү йөрөйөм әле, тип уйлапмы, колхоздың янғын һүндереүселәре айғырҙары торған ергә барған. Ул замандарҙа тоҡом айғырҙарын эшкә екмәй, айырым һарайҙа, янғын сыҡһа ғына ҡулланыу өсөн тоттолар. Хатта айырым бер кеше беркетелә ине уларҙы ҡарау өсөн.

Кашаф ағай айғыр ҡараусыға килгән дә: "Бер айғырыңды биреп тор әле, сабынлыҡты ҡарап киләйем", - тигән.

- Һин нимә, айғыр менеп үлергә итәһеңме, баш бирәме ни ул һиңә, - тип орошоп ташлаған айғыр ҡараусы.

- Һин нимә, мин бит бот буйы саҡтан ат өҫтөндә үҫкән малай, нишләп тота алмайым ти, мине мыҫҡыл итмә, - ти икән сәмләнеп киткән ағай.

- Белмәйем, белмәйем. Ана, колхоз рәйесенә барып һора, ул рөхсәт итһә, бирермен, был эште үҙ өҫтөмә ала алмайым, - тип, яуаплылыҡты икенсе кешегә ауҙарған айғыр ҡараусы.

Ағайыбыҙ рәйескә киткән. Ул да артистың был ҡыйыулығынан баҙаптыр инде:

- Ай-һай, ағай, баш бирмәҫ һиңә ул айғыр, ана, колхоздың екке атын ал, -ти икән. Кашаф ағайыбыҙ тағы үҙ һүҙен һүҙ итеп:

- Мине мыҫҡыл итмә, ҡустым, мин атта сабып йөрөгәндә һин тыумағайның әле, ниндәй генә айғыр менмәнем мин, - тип, ризалатҡан тегене.

Ҡош телендәй генә ҡағыҙ яҙҙырып алған да, кире айғыр ҡараусыға барған Кашаф ағай. Уныһы нишләһен инде, хужа рөхсәт иткәс, биргән айғырҙы.

Ағайыбыҙ эстән шикләнһә лә, айғырҙы менеп, ауыл осона табан киткән. Айғыр башты юғары тотоп, ғорур атлай, ул ғорурлыҡ, әйтерһең дә, ағайыбыҙға күсә, әммә үҙе шундай тыңлаусан, ҡайҙа борһаң, шунда бара, ә ағайыбыҙ аптырай, ти: "Нимә тип ҡурҡыталар икән, бынамын тигән айғыр, артист башым менән алашаға атланып йөрөй алмайым бит инде..." Шунан: " Айғырҙарын йәлләгән булғандарҙыр", - тип уйлап ҡуйған эстән.

Барып етеп, сабынлыҡты урап сыҡҡан ағайыбыҙ, сабынлыҡтың имен икәнен күргәс, иртәгә килеп сабырға төшөргә кәрәк, тигән дә, айғырын ауыл яғына борған. Юл көҙ сәселгән арыш баҫыуы аша үтә, ул да уңған, аттың ҡорһағынан аша. Шулай уйланып килгән саҡта ағайыбыҙ айғырҙың ҡапыл үрәпсеп кешнәп ебәреүенә һиҫкәнеп китә. Теҙгенгә ҡаты итеп йәбешә- йәбешеүен, әммә айғыр ауыҙлыҡты тешләп ала ла баш бирмәй, алға атыла. Айғырҙы ҡулға алыу өсөн төрлөсә маташып ҡарай ағайыбыҙ, әммә бер ни эшләй алмай, һыртынан төшөп ҡалмау өсөн ялына сытырман кеүек йәбешеүҙән башҡа сараһы ҡалмай.

Күрә, алда берәү ат менеп китеп бара. Айғыр, егеүле атты ҡыуып еткәс, тағы бер кешнәп ебәрә лә, арба тәртәләрен төрлө яҡҡа тибеп осороп, ат өҫтөнә менеп тә китә. Уныһы бейә булған икән, ә ағайыбыҙ айғыр өҫтөндә ялға йәбешеп аҫылынып тора, ҡулды ысҡындырһаң - эш харап...

Шөғөлөн тамамлағас, айғыр тынысланып, ергә төшә, шунан файҙаланып, ағайыбыҙ ҙа ергә һикерә. Бейәнең арыш араһына ҡасҡан хужаһы айғырҙың тынысланыуын күреп, килеп еткән дә һыныҡ тәртәне тотоп, ағайыбыҙға ташланған.

- Ты что наделал, сабака, - тип, ағайыбыҙҙы айғыр түңәрәтеп ҡыуа икән бейә хужаһы. Күрше ауылдың сыуашы булып сыҡҡан был.

- Не я вит, жеребес бит, - тигән була икән, ағайыбыҙ. Көс-хәл менән тынысланышып таралышҡандар былар. Әммә ағайыбыҙ башҡаса айғырға менмәгән, йүгәненән етәкләп, йәйәү генә ҡайтҡан ауылға.

Айғырҙы тапшырғанда хужаға:

- Бик һәйбәт, бына тигән айғыр, нимә тип ҡурҡытҡан булғанһығыҙҙыр,- тигән булған.

Йәй аҙағында артистар эшкә йыйылған, ғәҙәттә, отпускыға бер-берерһенән ялҡып таралһалар ҙа, һағынышып осраша улар. Кашаф ағайҙың серҙәше-һабаҡташы, режиссер ярҙамсыһы булып эшләгән Миңлехан ағай Йосопов була торғайны. Хатта гастролдәр ваҡытында ла гел генә фатирға бергә төшәләр, бергә ашай-эсәләр. Отпускынан һуң осрашҡас, Миңлехан ағай дуҫынан һорай икән:

- Нисек кенә ял иттең, һабаҡташ?

- Э-э-й, Йосоп, (Минихан ағайҙы театрҙа шулай тип йөрөтәләр ине) үлә яҙҙым бит мин быйыл.

- Нимә булды? - Тегенеһе аптырап ҡалған.

Кашаф ағай дуҫына бик оҙаҡ ҡарап торған да:

- Бер кемгә лә өнәтмәһәң, һөйләйем, - тигән. Сөнки артистарҙың фиғелен яҡшы белә ағайыбыҙ, көлкөгә ҡалыуынды көт тә тор.

- Миңә лә ышанмайһың икән, - тип үпкәләп ҡуйған дуҫы. Кашаф ағай ауылда айғыр менән булған хәлде һөйләп биргән, һуңынан, бер кемгә лә һөйләмә, үлтерермен, тип ҡуйған.

Йосоп, дуҫының айғыр өҫтөндә ултырыуын күҙ алдына килтереп, ике ай үҙе генә көлөп, саҡ тыйылып йөрөгән, унан түҙеме бөтөп, кемгәлер һөйләгән бит был хәлде. Театрҙа хәбәр тиҙ тарала шул, мөйөш һайын бер-береһенә һөйләп, Кашаф ағайҙан көлә башлағандар, әммә үҙе белмәй икән әле был хәлде.

Берҙән-бер көндө Кашаф ағайыбыҙҙы театр директоры саҡырта икән. Ул аптырай төшкән. Барып ингән ағайыбыҙ директорға, уныһы бик асыулы, хатта һаулыҡты ла алмай, ти. Ни әйтергә белмәүҙәндер инде:

- Һуңғы арала эскәнем юҡ, билләһи, Хафиз Шәйбәкович... - тигән ағай.

- Эскәнем юҡ, имеш, бына, уҡы, - тип, ағайыбыҙға бер ҡағыҙ ырғытҡан. Ҡурҡа-ҡурҡа ғына ҡағыҙҙы алып уҡып ҡараған Кашаф ағай һәм иҫе киткән: Ҡырмыҫҡалы районынан сыуаш Герасимов алимент юллай икән бынан. Ағайыбыҙ бының шаярыу икәнен белһә лә, иларҙай булып директорға ҡарап торған да:

- Э-э-й, Шәйбәкович, Шәйбәкович! Мин һеҙҙе етди генә кеше тип уйлаһам... - тип, ҡағыҙҙы бәреп, иларҙай булып сығып киткән.

Ошо хәлдән һуң ағайыбыҙҙың дуҫы Йосоп ике ай буйы унан ҡасып йөрөнө. Күреп ҡалһа, төҫө боҙолоп, айғыр кешнәгәндәй: "Үлтерә-ә-м!" - тип ҡысҡырып ебәрер ине, ә тегеһе шунда уҡ юҡҡа сыға торғайны.

Һуңға табан Кашаф ағайыбыҙ артистарҙың көлөүенә күнә башланы, хатта үҙе лә уларға ҡушылып, төҙәтмәләр индереп, айғыр менән булған хәлде һөйләп ташлар ине. Шулай ҙа уға "айғыр" тип исем таҡты артистар, хатта бының дауамын да уйлап сығарҙылар:

Имеш, бер нисә йыл үткәс, Кашаф ағай сираттағы отпускыһында тағы ауылына ҡайтып бара икән. Автобустан төшкәс, ике саҡрым атларға кәрәк. Бара торғас, бер егеүле ат ҡыуып еткән быны. Төшөрөп алған бер йәшерәк егет атын туҡтатҡан да: "О-о-о, Кашаф ағай, әйҙә, ултыр," - тип, арбаһына ултыртҡан. Әммә егет быларҙың ауылына түгел, ә күрше ауылға табан борған атын. Ағайыбыҙ төшөп ҡалырға уйлаһа ла, теге бының ай-вайына ҡарамай:

-Ағай, ултыр, мин һине алып ҡайтып һыйлайым, күптән саҡырып алырға тип уйлап йөрөй инем, һис тура килтереп булмай, йәтеш тап булдың әле. Ҡурҡма, үҙем алып барып ҡуйырмын ауылыңа, атым шәп минең - тип, өҙмәй ҙә ҡуймай, ағайыбыҙҙы алып ҡайтып киткән.

-Мин һине танымайым бит әле, ҡустым, кем улы булаһың һуң?

-Уныһы мөһим түгел, зато мин һине таныйым, - ти икән тегеһе.

-Мине артист булараҡ таныйҙыр, сәхнәлә уйнауымды оҡшаталыр, - тип, ғорурланып ҡуйған ағайыбыҙ.

Ысынлап та, егет кеше Кашаф ағайҙы алып ҡайтҡан, ҡатыны өҫтәл әҙерләп ебәргән, икәүләп шәп итеп һыйлағандар үҙен, шунан егет атын егеп, ағайыбыҙҙы ауылына алып киткән. Ағайыбыҙ был хәлгә аптырап, һорай икән:

-Ҡустым, мин аңламаным, ни өсөн шул тиклем хөрмәт күрһәттең һуң әле, ни яҡшылығым тейҙе?

-Яҡшылығың, ағай, көн дә тейеп тора, бына атыма ҡара, бындай ат был тирәлә бер кемдә лә юҡ, миндә генә!

-Туҡта әле, ҡустым, атта минең ни ҡыҫылышым бар һуң?

-Как ҡыҫылышың булмаһын, был атты мин, бер йәш сағында, сыуаш Герасимовтан һатып алдым. Ул миңә:

-Был тай артист Кашафтың тоҡомо, шулай булғас, шәп ат буласаҡ, - тип бирҙе. Ысынлап та, шәп ат булып сыҡты, бер ғәйебен дә табып булмай, еккән һайын рәхмәттәр уҡыйым. "Бер һыйлармын үҙенде", - тигән әйтеүем бар ине, Аллаға шөкөр тормошҡа ашты теләгем...

Ағайыбыҙ айғыр менән булған ваҡиғаны хәтерләгән дә, йылдам ғына юртып, ауылына алып ҡайтып барған егеүле атҡа ҡарап йылмайып ҡуйған. Үткән замандың ҡыҙыҡ хәлдәре лә, ғүмерҙең ни тиклем ҡыҫҡа булыуы ла сағылып торған был йылмайыуҙа...

**Әхтәм АБУШАХМАНОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯҢЫ ЙЫЛДЫҢ...

## яңы хаҡтары

■ 1945 йылға тиклем тыуған граждандарҙың 1991 йылдың 20 июненә РФ Һаҡлыҡ банкыһында аҡсаһы ҡалһа, улар ошо сумманан өс тапҡыр ҙурыраҡ күләмдә компенсация аласаҡ. Әгәр ҙә алдан вкладтар буйынса ниндәйҙер компенсация алған булһағыҙ, ул күрһәтелгән компенсация күләменән алып ташлана. 1946-1991 йылдарҙа тыуғандарға компенсация ике күләмдә түләнә.

■ Илдең берҙәм социаль һалымдан баш тартып, тулы социаль страховкалауға күсеүенән рәсәйлеләр күп өҫтөнлөктәр аласаҡ. Хәҙер эш биреүселәр хеҙмәткәрҙәр өсөн взностарҙы федераль бюджет аша түгел, ә бюджетта булмаған фондтарға - пенсия, социаль страховкалау һәм мотлаҡ медицина страховкаһына тура күсерә. Тимәк, хеҙмәткәрҙәр эшкә ваҡытлыса яраҡһыҙлыҡ буйынса түләүҙәрҙе, йөклөлөк һәм бала табыу, бала ҡараған өсөн пособиеларҙы күберәк аласаҡ. Әлек хеҙмәткәрҙең эш стажы 8 йылдан күберәк булып, уға эш хаҡының 100 проценты түләнгәндә лә, ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса түләү күләме 18 720 һумдан ашмаҫҡа тейеш ине. Быйылдан был сумма 34 583 һумға тиклем күтәрелде. Йәш ярымға тиклем бала ҡарау өсөн пособие 85 процентҡа үҫеп, уның иң юғары кимәле 7 194 һумдан 13 833 һумға, ә йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие күләме 25 390 һумдан 34 583 һумға тиклем етте. Был Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестәр, Башҡортостанда 2010 йылға тиклем үк максималь түләүҙәр юғары, мәҫәлән, йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие 29 198,5 һум ине, тимәк, яңы лимиттар республикала тағы ла юғарыраҡ буласаҡ.

■ Пенсионерҙар өсөн яҡшы яңылыҡ. Башланған валоризация пенсия күтәрелеүенә килтерәсәк. 2002 йылға тиклем хеҙмәт стажы булғандар 10 процент өҫтәмә ала. Совет осоронда эшләгән һәр йыл өсөн 1 процент өҫтәмә көтә алаһығыҙ. Әгәр ҙә валоризациянан һуң пенсия күләме йәшәү минимумынан түбән була икән, пенсия социаль өҫтәмә иҫәбенә минимумға еткереләсәк.

■ 1 апрелдән пенсия яңынан индексацияланa. Хеҙмәт пенсияһы - 6,3 процентҡа, социаль пенсия - 12 процентҡа артасаҡ. Әгәр ҙә элек пенсияның база һәм страховка өлөшө айырым индексацияланһа, хәҙер база өлөшө страховка өлөшөнә күсә һәм улар бер юлы күтәрелә.

■ Һалымдар өлкәһендә лә яңылыҡтар бар. Быйылдан хосуси милкегеҙҙә өс йылдан ашыу булған мөлкәтте (торлаҡ һәм ерҙән тыш) һатҡанда тотоп ҡалынған аҡса (вычет) ике тапҡырға ҙурайтыла һәм иң күбе 250 мең һум тәшкил итә. 2 миллионға тиклемге мөлкәттән тотоп ҡалынған аҡсаға торлаҡ ҡына түгел, ер участкаһы ла һатып алырға яраясаҡ, тик бының өсөн ергә генә түгел, ә йортҡа ла милек хоҡуғы юллау кәрәк буласаҡ.

■ Акциз күтәрелеү сәбәпле, алкоголь продукцияһы (һыраны ла индереп) һәм тәмәке ҡиммәтләнәсәк. Бынан тыш, араҡыға минималь хаҡ билдәләнде: быйылдан ул 89 һумдан кәм тормаясаҡ. Был сумманан осһоҙораҡ спиртлы эсемлек һатыусы магазиндарҙы лицензиянан мәхрүм итеүгә тиклем яза көтә.

■ Дәүләт иң кәрәкле дарыуҙарҙың хаҡын да ҡаты контроль аҫтына алды. РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы фараздары буйынса, дарыуға хаҡтар яҡынса 20 процентҡа төшәсәк.

■ 1 февралдән "Рәсәй Федерацияһында сауҙа эшмәкәрлеген дәүләт тарафынан көйләү нигеҙҙәре тураһында"ғы закон үҙ көсөнә инә, ул властарға социаль мөһим аҙыҡ-түлеккә - икмәккә, тоҙға, һөткә, шәкәргә, йомортҡаға хаҡтар артыуын көйләргә мөмкинлек бирә.

ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ



**Һуңғы йылдарҙа балалар, йәштәр араһында спортҡа иғтибар бермә-бер арта бара. Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында иһә спорт күп балаларҙың тиерлек йәшәү рәүешенә әүерелгән. Бына, мәҫәлән, XI класс уҡыусыһы Наил Ниғмәтуллин гер күтәреү спорты менән шөғөлләнһә, X класс уҡыусыһы Айгөл Байегетова еңел атлетиканы үҙ итә. Үҙҙәренең спорт төрө буйынса улар төрлө ярыштарҙа алдынғылыҡты бирмәй, гел призлы урындар яулап килә. Гимназияның спорт алдынғылары менән әңгәмәбеҙ уларҙың яраткан шөғөлө хаҡында барҙы.**



# НАСАР ҒӘҘӘТТӘРЕҢ БАРМЫ?

## Спорт менән дуҫлаш!

**Ни өсөн нәҡ ошо үҙегеҙ шөғөлләнгән спорт төрөн һайланығыҙ?**

**Наил НИҒМӘТУЛЛИН:** Мин инде бер нисә йыл гер күтәреү менән шөғөлләнәм. Гер күтәргән кешенең мускулдары нығый, көсө арта, кәүҙәһе мыҡтылана, шулай уҡ рухы, ихтыяр көсө нығый. Егет кеше көслө, батыр булырға, килеп сыҡҡан һәр төрлө ҡаршылыҡтан сыға белергә, киләсәктә ғаиләһен һаҡлай алырға тейеш, тиген фекер мине ошо спорт төрөнә алып килде. Бер ниндәй ҙә түңәрәккә йөрөмәнем, үҙ аллы шөғөлләнә башланым. Республикабыҙҙа был спорт төрө ул тиклем үҫеш алмаған. Минеңсә, киләсәктә гер күтәреү спортына иғтибарҙы арттырып, егеттәрҙе был спорт төрөнә ылыҡтырырға кәрәк.

Быйыл гимназияла гер күтәреү спорты менән ҡыҙыҡһынған, көслө егеттәрҙе йыйып, команда төҙөнөм. Беҙ командабыҙ менән төрлө ярыштарҙа уңышлы ғына сығыш яһаныҡ. Минә кәңәштәре менән ярҙам итеп тороусы Абдрафиҡов Фәйзулла Ғәбделйән улына ҙур рәхмәт белдерер инем.

**Айгөл БАЙЕГЕТОВА:** Еңел атлетика менән 10 йәштәр тирәһендә шөғөлләнә башланым. Тыуған ауылым Белорет районы Ҡаһарман мәктәбендә уҡыған ваҡытта ла йүгерә, ярыштарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулай инем. Был спорт төрө бөтәһенә лә таныш, уның менән ялҡауланмаған һәр кем бөгөндән шөғөлләнә ала. Йүгереү кешенең сәләмәтлегенә шул тиклем яҡшы тәьҫир итә, йүгергән кеше бер ваҡытта ла ауырымай, тип уйлайым.

Белеүегеҙсә, Белорет районы спорт буйынса алдынғы райондарҙан иҫәпләнә. Яҡташым, талантлы спортсы, халыҡ-ара ярыштарҙа еңеүсе Лилиә Шобухова минең кумирым. Уның профилләшкән спорт төрө - 5000 метрға йүгереү. Бынан башҡа, ул 800 һәм 1000 метрлы дистанцияларҙа ла ҡатнаша. Лилиә Шобухова Рәсәй Федерацияһының йыйылма командаһы составында. Мин үҙемдең шундай яҡташым менән ғорурланам, унан өлгө алырға тырышам.

**Әхлаҡһыҙлыҡ беҙҙең замандың ҙур проблемаларының береһенә әйләнеп китте. Нисек уйлайһығыҙ, йәштәрҙе тәрбиәләүҙә спорт ярҙам итә аламы?**

**Наил НИҒМӘТУЛЛИН:** Спорт менән шөғөлләнгән кеше бөтә энергияһын спортҡа биргәнгә күрә, уның күңелендә төрлө насар уйҙарға, яуыз ниәттәргә урын ҡалмай. Әгәр эскелектән, тәмәкенән арына алмағандар спорт менән шөғөлләнһә, ошо алама ғәҙәттәргә булған "мөхәббәт" тиҙҙән һүрелер ине. Етди рәүештә шөғөлләнгән эштәре булмағанға күрә, йәштәр эсә, тарта, урам ҡыҙлата. Бигерәк тә ауыл йәштәре кистәрен нимә менән шөғөлләнергә белмәй. Бәлки, нәҡ ауылдарҙа спорт комплекстары булдырып, төрлө түңәрәктәр асып, йәштәрҙе спортҡа ылыҡтырырға кәрәктер? Минеңсә, быны йәштәр бик ятлап ҡабул итер ине.

**Айгөл БАЙЕГЕТОВА:** Ваҡыттарын бушҡа уҙғарған йәштәргә ҡарайым да, уларҙың исраф ителгән ваҡыттарын йәлләйем. Тығыҙ режимға өйрәнгәс, беҙҙең өсөн ваҡыттан да ҡиммәт нәмә юҡ. Шуға ла кемдендер ваҡыттың ҡәҙерен белмәүе беҙҙе аптырата. Йәштәрҙе тәрбиәләүҙә, үҫмерҙәрҙе шул алама ғәҙәттәрҙән һаҡлап ҡалыуҙа иң яҡшы сараларҙың береһе - ул спорт. Спорт менән шөғөлләнә башлаған кеше үҙе үк был ғәҙәттәрҙән баш тартасаҡ, сөнки спорт алама ғәҙәттәр менән бер нисек тә яраша алмай.

**Спортсы кеше ялҡау була аламы? Ғөмүмән, спортсыларға ниндәй сифаттар хас?**

**Наил НИҒМӘТУЛЛИН:** Спортсы кеше егәрле, көслө ихтыярлы, сабыр холоҡло кеше. Ялҡау кешенең көн һайын күнекмәләр менән шөғөлләнергә "елкәһе" етмәйәсәк. Тағы ла спорт менән шөғөлләнеү кешенән ҙур яуаплылыҡ талап итә, шулай уҡ ниндәйҙер кимәлдә үҙүҙеңә талапсан булырға ла тура килә. Әгәр күнекмәләр менән даими шөғөлләнмәһәң, уның сәләмәтлек өсөн файҙаһы булмаясаҡ.

**Айгөл БАЙЕГЕТОВА:** Спорт өлкәһендә уңыш ҡаҙанырға теләгән кешенән етдилек талап ителә, шулай уҡ ул донъяға битараф була алмай. Спортсының көнө иртә менән тороп, күнекмәләр яһауҙан башлана. Әленән-әле үткән ярыштарҙан, ярыш алды күнекмәләренән ул арырға тейеш түгел. Тимәк, спортсы бер нисек тә ялҡау була алмай.

**Буш ваҡытығыҙ бармы, уны нисек уҙғараһығыҙ? Киләсәккә хыялдарығыҙ?**

**Наил НИҒМӘТУЛЛИН:** Әлеге ваҡытта гимназиябыҙҙа физика профиле буйынса белем алам. Киләсәктә лә ошо йүнәлеш буйынса китергә, тиген маҡсатым бар. Был фәнде тәрәндән өйрәнеү өсөн буш ваҡытымда төрлө мәсьәләләр сисәм. Хыялым - Бауман исемендәге Мәскәү дәүләт техник университетына уҡырға инеү. Әлеге ваҡытта унда гимназиябыҙҙы тамамлаған байтаҡ дуҫтарым белем ала һәм улар был университеттың өҫтөнлөктәре хаҡында һөйләй, мине лә үҙҙәре янына саҡыра.

**Айгөл БАЙЕГЕТОВА:** Буш ваҡытымда әҙәби китаптар уҡыйым, дуҫтарым менән аралашам. Төп хыялым - гимназияны яҡшы тамамлап юғары уҡыу йортона уҡырға инеү. Киләсәктә табип һөнәрен үҙләштерергә уйлайым. Шуға күрә әле был йүнәлеш буйынса уҡырға ингәндә кәрәк буласаҡ предметтарҙы тәрәндән өйрәнергә тырышам.

**Ярыштарҙа еңгәндән һуң ниндәй тойғо кисерәһегеҙ?**

**Наил НИҒМӘТУЛЛИН:** Көсөргәнешле ярыштарҙан һуң һине еңеүсе тип иғлан итһәләр, бөтә тулҡынланыуҙар, ҡалтыраныуҙар үтә, еңел һәм тәрән итеп тын алаһың. Йөрәктә шундай еңеллек! Ниһайәт, мин быны эшләнем, бөтә ҡаршылыҡтарҙы ла еңеп сыҡтым, алдыма ҡуйған маҡсатыма ирештем! Алдағы һынауҙарҙа ла бирешмәҫкә, тиген ниндәйҙер стимул, дәрт уяна.

**Айгөл БАЙЕГЕТОВА:** Ул тойғоно һүҙ менән генә аңлатып бөтөп буламы икән! Ул - еңеү тойғоһо, уны тормошта еңеүҙәр яулаған кеше генә аңлай һәм баһалайҙыр. Ғөмүмән, кеше Ергә ошо тойғоно татыу, һәр көнөндә, һәр аҙымында еңеүсе булыу өсөн яратылғандыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гимназия уҡыусылары битарафлыҡ, ғәмһеҙлек, ялҡаулыҡ баҫҡан кешене спорт менән уятып, насар ғәҙәттәренән дә арындырып була, тиген фекерҙә. Ошоно тормошҡа ашырғанда һәр кем тормошта еңеүсе булып йәшәй ала, ти улар. Бер олоно, бер кесене тыңла, тигәндәй...**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА** яҙып алды.

ӘҘӘМ КҮРКЕ...

# ИРҘӘР ЗАУЫҒЫ...

## аяҡ кейемендә нығыраҡ сағыла

**Ҡалабыҙ урамдарында һаман да спорт трениктары һәм аҡ носки менән шлепанцы кейгән егет-елкенсәкте күрергә мөмкин. Улар был кейемдә, моғайын да, уңайлы булған өсөн йөрөйҙәр. Ә үҙенең ошондай тышҡы ҡиәфәте менән мода стиле ҡағиҙәләрен боҙоуы тураһында уйлаймы икән улар? Урамда йөрөү - бер хәл. Әгәр ҙә был кеше ҙур компанияға эшкә урынлашырға ошондай сәскәле шорты һәм сандалийҙарҙа килһә, ул саҡта нимә булыр? Быйың бер ниндәй ҙә ҡурҡынысы юҡмы?**

**Тәүҙә Марат Сәлихов исемле егеттең һөйләгәндәренә ҡолаҡ һалайыҡ:**

- Мин өсөнсө курстан алып пинжәк һәм салбар кейеп йөрөнөм, айырым осраҡтарҙа аҡ күлдәк кейеп, галстук та таға инем. Эш стилендә кейенеп йөрөй башлағас, минә ҡарата иғтибар ҡырҡа үҙгәрҙе, тип әйтә алмайым, әммә мин үҙемде күп тапҡырға уңайлыраҡ итеп тоя башланым. Шорты һәм кроссовкаларҙа йөрөгән саҡта - һин бары тик студент ҡына. Ә бына костюм кейеп алыуың була, барыһы ла үҙгәрә: ҡарашың, үҙеңде тотошоң, кешеләр алдындағы баһаң... Был, бәлки, мәғәнәһеҙ ҙә яңғырайҙыр, әммә мин үҙемдә элеккегә ҡарағанда мөһабәт ҡиәфәтле һәм ихтирамлы итеп тоям. Шуға күрә, бишенсе курсҡа еткәндә әлеге көнгәсә шөғөлләнгән шәхси эшемдә асырға йөрьәт итеүемә аптырарға ла кәрәкмәйҙер.

Бөгөн тышҡы ҡиәфәт уңышлы эшҡыуар өсөн мөһим әйберҙәрҙең береһе булып тора. Кейеменә ҡарап ҡаршы алалар, тигәндәй, хеҙмәттәштәреңдең ышаныслы һәм фирма абруйын бары тик үҙеңде тейешле кимәлдә күрһәтә белеп кенә яуларға мөмкин. Мин үҙем һәр ваҡыт кешенең нисек итеп кейенеүенә иғтибар итәм, шул иҫәптән эшкә ҡабул иткән ваҡытта ла быны күҙ уңында тотам. Әгәр ҙә минә нимәлер оҡшамай йәки шикле тойолһа, йыш ҡына мин эш эҙләүсенән баш тартам. Әйткәндәй, был тойомлау ысулы һәр ваҡыт тигәндәй раҫҡа сыға.

Бына шулай, хөрмәтле шорты кейергә яратыусылар! Әгәр көтмәгәндә дресс-код талап ителгән сит ил компанияһына эшкә урынлашырға тура килһә һәм бындай әйбер хаҡында артыҡ белемең юҡ икән, **Өфө дәүләт иҡтисад һәм сервис академияһының Дизайн һәм милли мәҙәниәт институты студенты Алена Ғатауллинаның түбәндәге кәңәштәре һеҙгә ярҙамға килер:**

- Ирҙәр өсөн классик стилдең төп компоненты, әлбиттә, декоратив деталдәре аҙ булған костюм. Ирҙәр костюмының ике төрө киң таралған - пинжәк менән салбарҙан торған "двойка"лар һәм пинжәк, жилет, салбарҙан торған "тройка"лар. Улар ғәҙәти эш костюмдарынан ябайлығы һәм килешле булыуы менән айырылып тора. Классика һәр нәмәлә сама һаҡлауҙы күҙ уңында тота, шуның менән кешенең эшкә ҡарата етди мөнәсәбәтен күрһәтә. Пинжәк кәүҙәгә ярашлы итеп һайланырға, eң оҙонлого баш бармаҡ башланған ергә етеп торорға тейеш. Салбар һәм жилет бер төҫтә һәм бер төрлө туҡыманан тегелгән булырға тейеш. Пинжәккә килгәндә, ул бер йәки ике ҡаушырмалы булырға мөмкин. Классик пинжәктең мотлаҡ инглиз яғаһы булырға тейеш. Костюмдың яурында нисек ултырыуы бик мөһим, әгәр ул тартылып йәки төшөп тора икән, ундайҙы һатып алма. Костюм һайлағанда буй-һын, кәүҙә төҙөлөшөн иҫәпкә алырға кәрәк. Урта буйлы һәм нормаль кәүҙәле ир-егеттәр өсөн сик юҡ. Ә бына тулы кәүҙәле ирҙәр өсөн вертикаль һыҙат төшкән шыма туҡыманан тегелгән костюм яҡшы булыр, был һеҙҙең буйҙы оҙонайтып та күрһәтәсәк. Оҙон буйлыларға эре йәки ваҡ шаҡмаҡлы өбөрөлө туҡыманан тегелгән кейем ҡулай булыр. Классик костюм кеше кәүҙәһенә ятышлы ғына булырға тейеш, шуға ла үҙенең имиджы тураһында хәстәрлек күргән дәрәжәле ирҙәр костюмды заказ биреп тектереүҙе хуп күрә. Дөйөм алғанда, ирҙәрҙең эш костюмын дүрт йүнәлешкә айырып йөрөтөү ҡаралған.

**Корпоратив стиле** костюм-двойканы, ике ҡаушырмалы костюмды, костюм-тройканы, ике, өс йәки дүрт төймәле костюмды үҙ эсенә ала. Был стилдә, ғәҙәттә, аҡ төҫтәге күлдәк менән галстук булыуы шарт.

**Шартлы-эшлекле стиль.** Бында костюм ғына түгел, хатта пинжәк тә мотлаҡ ҡаралмаған. Әммә эшлекле стилдең ирекле вариантында бөхтәлек һәм ыҡсымлыҡ мөһим булып тора. Әгәр эш ваҡытының күп өлөшөн һорғолт-йәшел төҫтәге салбарҙа һәм ғәҙәти аҡ күлдәктә үткәрәһең икән, уларҙың һәр ваҡыт таҙа һәм үтекле булыуын күҙәтергә кәрәк. Тағы ла бер ҡағиҙә: даими рәүештә ботинкаларҙы таҙартып торорға һәм бер ваҡытта ла офисҡа кроссовкаларҙа килмәскә. Бер һүҙ менән әйткәндә, профессионаллек тойғоһо һәр ваҡыт һәм бөтә нәмәлә лә һаҡланырға тейеш.

**Ҡәтғи булмаған эш стиле.** Был стиль корпоратив һәм формаль булмаған кейем стиле араһында тора. Ниндәйҙер осраҡта ул үҙләштереү өсөн иң ҡатмарлыһы ла булып торалыр әле. Костюм мәжбүри атрибут булып тормай, әммә костюм кеймәйһең икән, күлдәк менән галстук та йөрөтмәҫкә мөмкин. Спорт стилендә тегелгән пинжәк һәм ябай күлдәк менән салбар ҙа яраҡлы вариант булыр. Был стилдә яҡшы ҡиәфәт булдырыр өсөн поло-күлдәк йәки спорт стилендә тегелгән пинжәк менән свитер кейергә мөмкин. Был стилдең идеяһы үҙенә ниндәйҙер кимәлдә комфорт биреп, шул уҡ ваҡытта тәрбиәле һәм профессиональ ҡиәфәттә булыуҙан ғибәрәт.

**Ирекле эш стиле.** Был ял көндө эшкә сыҡҡандағы кеүек итеп кейенеп йөрөү тигәнде аңлатмай. Киреһенсә, теләһә ҡайһы ваҡытта һине начальник үҙенә саҡыртып алырына һәм бындай осраҡта үҙеңдең илтифатһыҙ ҡиәфәтең өсөн аҡланырға тура килмәүенә әҙер бул. Шуға күрә лә кейем һайлағанда бөхтәлек, стиль һәм элегантлыҡты һаҡлау мөһим.

**Тағы ла шул. Билдәле булыуынса, аяҡ кейеме башҡа кейем предметына ҡарағанда ирҙәр зауығын нығыраҡ сағылдыра. Ботинкаларҙың ниндәй торошта булыуы һинең эш менән, бигерәк тә яҡшы тәрбиә талап иткән әйберҙәр менән идара итеүең тураһында һөйләй. Шулай булғас, үҙең өсөн һығымталар яһа. Ҡыҫҡаһы, тышҡы ҡиәфәт өсөн күпме аҡса тотоноу мөһим түгел, иң мөһиме, һиндә стиль тойғоһо булһын! Шул саҡта һәр ҡайҙа ла лайыҡлы күренерһең.**



УҢЫШ ҠАҘАН



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Күҙгә күренгәне ваҡытлыса, Күренмәгәне мәңгелек

Лекция тыңлағанда һөйләүсенең һүҙҙәре бер ҡолағыңдан инеп, икенсеһенән сығып киткән кеүек тойолғаны юҡмы? Йәки китап уҡыған ваҡытта ундағы һүҙҙәрҙең бәләкәй генә ҡара нөктәләргә әйләнгәнен шәйләмәйһеңме? Физика ҡанундары күҙлегенән ҡарағанда, был күренеште аңлатырға мөмкин, сөнки әйтелгән һүҙ - ул бары тик беҙҙең ҡолаҡ ярыһына тәьҫир итеүсе тауыш тулҡындарының ҡыҫҡа ғына тирбәлеүе, ә баҫма һүҙҙәр - нур тулҡындарының күҙ селтәрендәге ҡыҫҡа ғына сағылышы. Ваҡыт үтеү менән тирбәлеү тарала һәм телмәр тамамланғас, йәки күҙеңде йомғас, китап битендәге текст та юғала.

Лекцияның әһәмиәтен тойғо аша ҡабул итеүҙән тыш, оратор әйтергә теләгән идеяларҙа эҙләргә кәрәк. Тыңлауға матур, әммә бер ниндәй ҙә мәғлүмәт йөрөтмәгән һүҙҙәр алһыу шәкәр мамығына оҡшаған: ул да ауыҙға ҡабыу менән ирей, әммә бер ниндәй ҙә хәтирә ҡалдырмай. Ә бына мөһим идеяны тормошҡа ашырыу тураһында хәбәр иткән ябай һәм аныҡ әйтелгән һүҙҙәр үҙгәртеү һәм үҫеү көсөнә эйә. Һүҙҙәр бары тик физик билдәләр генә, ә уның артында ҙур һәм һыклы ысынбарлыҡ тора. Беҙҙең тарафтан ҡулланылған һүҙҙәр һәр ваҡыт теге йәки был идеяны әйтеп бирмәҫкә лә мөмкин, әммә беҙ фекеребеҙҙе тирә-йүндәгеләргә аңлайышлы итеп әйтеү һәләтен әкренләп камллаштыра алабыҙ.

Мадоннаның бөхетле замана кешеһен күҙ алдына баҫтырған популяр йыры бар. Унда: "Мин матди ҡыҙ һәм матди тормошта йәшәйем", - тип йырлана. Минең ҡарашҡа, был йыр күңел асыу, ләззәт алыуға ҡоролған, кешенең нәфсеһе теләгән барлыҡ шатлыҡтар менән тулы ялған тормош идеалын сағылдыра. Әммә матди донъя үҙгәреп тороусан. Беҙ кисә ынтылған һәм бөгөн уға эйә булған әйбер иртәгә юҡҡа сығыуы мөмкин һәм беҙ тағы ла тормошҡа ашмаған хыялдар солғаныуында ҡалабыҙ. Будда традицияһы, бөтә ғазаптарҙың тамыры телә‌ктә ята һәм ул матди әйберҙәр тураһында һүҙ барғанда хәҡиҡәткә яҡыныраҡ кеүек тойола, тип өйрәтә.

Алтынға ҡарарға һәм уның сыңын тыңларға яратҡан Мидас тигән боронғо батша тураһында риүәйәт йөшәй. Батша алтындар тормошона мәғәнә бирәсәгенә инанған һәм был теләге тормошҡа ашыуҙан һушы киткән: нимәгә ҡағылһа, шул алтынға әүерелгән. Әммә тик алтындан ғына ҡоролған донъяла тороп ҡалғас, үҙ хатаһын аңлаған. Ул ашай ҙа алмаған, сөнки аҙыҡ иренеңә тейеү менән алтынға әүерелгән, ҡыҙын ҡосам тиһә, ул да алтын һынға әйләнгән. Бер ниндәй ҙә тереклеккә ҡағылыу мөмкинлеге ҡалмағас, батша яратыу һәм йәшәү мөмкинлеген дә юғалтҡан. Ул матди байлыктың үлемесле ләғнәт булыуын аңлаған, һәм был ҡот осҡос бүләкте унан кире алыуҙарын һәм тормоштоң ысын рәхәтлектәрә менән тағы ла бер тапҡыр кинәнес алырға мөмкинлек биреүҙәрен һорап, доға ҡылған.

Һин ынтылған яҡшы тормош матди әйбергә генә бәйле түгел. Сөнки матди әйбер - яҡшы әйберҙәрҙең физик сағылышы ғына. Әммә ысынлап та яҡшы әйбер бер ваҡытта ла ватылмай һәм моданан сыҡмай, сөнки улар күренмәй һәм мәңгелек. Изгелектән, мөхәббәттән йәки ижади идеяларҙан кинәнес ал - һәм ул һәр ваҡыт һинең менән булыр!

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



# 1 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
16.10 "Давай поженимся!"
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.20 "Школа". Сериал
18.50 "След". Сериал
19.40 "Жди меня"
20.20 "Спальный район", 52-я серия. Мелодраматический сериал
21.00 Время
21.30 "И все-таки я люблю...", 21-я серия
22.30 "Выжившие за гранью". Док. фильм
23.30 "Школа". Сериал
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Познер"
01.10 "Гении и злодеи"
01.45, 03.05 "Соглядатай". Комедия
03.00 Новости
03.20 "Поединок"

## РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Терапия любовью". Мелодрама
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Дом без выхода". Мелодрама
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Дом без выхода. Продолжение
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
18.20 "Кармелита. Цыганская страсть". Сериал
19.00 "Слово женщине", 11-я серия. Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Райские яблочки", 12-я, закл. серия. Сериал
21.55 "Райские яблочки. Жизнь продолжается", 1-я и 2-я серии. Сериал
23.45 "Дежурный по стране"
00.45 "Вести+"
01.05 "Честный детектив"
01.40 "В городе Сочи темные ночи"
04.15 "Городок"

## НТВ
